МУНИЦИПАЛЬНОЕ АВТОНОМНОЕ
ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ
ДОПОЛНИТЕЛЬНОГО ОБРАЗОВАНИЯ
«НАУЧНО-ИНФОРМАЦИОННО-МЕТОДИЧЕСКИЙ ЦЕНТР»
ГОРОДСКОГО ОКРУГА ГОРОД УФА
РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

# Методическое пособие

по повышению уровня владения башкирским языком, языковой культурой, речевой грамотностью у детей дошкольного возраста, а также совершенствование образовательной деятельности в национальных дошкольных образовательных учреждениях

УФА 2024

**Кагарманова А.Ф.** Методическое пособие по повышению уровня владения башкирским языком, языковой культурой, речевой грамотностью у детей дошкольного возраста, а также совершенствование образовательной деятельности в национальных дошкольных образовательных учреждениях. – Уфа: Муниципальное автономное образовательное учреждение дополнительного образования «Научно-информационно-методический центр» городского округа город Уфа Республики Башкортостан, 2024. – 50 стр.

**Редакционная коллегия:**
Габдуллин А.М., заведующий отделом МАОУ ДО «Научно-информационно-методический центр» городского округа город Уфа Республики Башкортостан;
Нигматова З.В., заведующий отделом МАОУ ДО «Научно-информационно-методический центр» городского округа город Уфа Республики Башкортостан;

**Рецензенты:**
Мусабирова Ф.Р., заведующий МАДОУ «Башкирский детский сад № 308» городского округа город Уфа Республики Башкортостан;
Хамматова М.З., старший воспитатель МАДОУ «Башкирский детский сад № 308» городского округа город Уфа Республики Башкортостан;
Кагарманов И.Ф., директор Департамента по воспитательной работе и молодежной политике ФГБОУ ВО Башкирский государственный педагогический университет им. М. Акмуллы, Отличник образования Республики Башкортостан;

**Технические редакторы:**
Рамазанова Л.Ф., методист МАОУ ДО «Научно-информационно-методический центр» городского округа город Уфа Республики Башкортостан.

Методическое пособие создано и выпущено в рамках образовательного проекта для дошкольных образовательных организаций «Акбузат», ставшего победителем в конкурсе на предоставление некоммерческим неправительственным организациям грантов Главы Республики Башкортостан в форме субсидий на сохранение и развитие государственных языков Республики Башкортостан и языков народов Республики Башкортостан в 2024 году.

© Управление образования
Администрации городского округа
город Уфа Республики Башкортостан, 2024

© МАОУ ДО «Научно-информационно-
-методический центр»
городского округа город Уфа
Республики Башкортостан, 2024

## Инеш һүҙ

Методик ҡулланма мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың башҡорт телен, тел мәҙәниәтен, телмәр белемен белеү кимәлен күтәреү, шулай уҡ милли мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларында белем биреү эшмәкәрлеген камиллаштырыу буйынса саралар серияһын үҙ эсенә ала. Туған телде белеү, телмәрҙе үҫтереү мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың заманса мәктәпкәсә белем һәм тәрбиә биреүҙең дөйөм нигеҙе булараҡ ҡарала. Тел - халыҡтың төп хазинаһы: туған телгә һөйөү һәм һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләү тураһында бала саҡтан уҡ аңлатыу мөһим. Туған тел, аралашыу һәм тирә-яҡтағы ысынбарлыҡты танып белеү сараһы ғына түгел, милли мәҙәни традицияларҙы теркәү, һаҡлау сараһы булараҡ та кәрәк.

Был йыйынтыҡта мәктәпкәсә белем биреү ойошмалары өсөн 7 модуль тупланған:

1. Ғаиләм – бөтә йәш төркөмдәре өсөн башҡорт халҡының традицион ғаилә ҡиммәттәренә арналған.
2. Уйнайыҡ – бөтә йәш төркөмдәре өсөн. Уйын формалары ярҙамында тел компетенцияларын үҫтереү.
3. Аралаш – урта һәм өлкән төркөмдәр өсөн. Телмәрҙе башҡорт телендә диалогтар, мәктәпкәсә театрҙар ойоштороу юлы менән үҫтереү.
4. 100 һүҙ – урта һәм өлкән төркөмдәр өсөн. Иң ҡулланылған башҡорт һүҙҙәренең лексик минимумын билдәләү.
5. Бейейек – өлкәндәр төркөмө өсөн. Башҡорт халыҡ бейеүҙәре менән танышыу.
6. Полиглот – өлкән һәм әҙерлек төркөмдәре өсөн. Бер сит тел һәм башҡорт телендә дәрестәр ойоштороу, донъя халыҡтары мәҙәниәттәре менән таныштырыу.
7. Атайсал – өлкән һәм әҙерлек төркөмдәре өсөн. Балаларҙы Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте менән таныштырыу.

Һәр модуль ай һайын үткәрер өсөн бүленгән. Ай һайын мәктәпкәсә йәштәге балалар менән эшләүҙең төрлө формалары тәҡдим ителгән.

## Введение

Данный сборник включает серию мероприятий по повышению уровня владения башкирским языком, языковой культурой, речевой грамотностью у детей дошкольного возраста, а также совершенствованию образовательной деятельности в национальных дошкольных образовательных организациях.

Овладение родным языком, развитие речи являются одними из самых важных приобретений ребенка в дошкольном возрасте и в современном дошкольном образовании рассматриваются как общая основа и воспитание ребенка.

Важно с детства создавать представление о том, что язык – это главное сокровище народа: воспитывать любовь и бережное отношение к родному языку. Родной язык необходим не только как средство общения и познания окружающей действительности, но и как средство фиксации, сохранения национальных культурных традиций.

В данном сборнике представлены 7 модулей образовательного проекта для дошкольных образовательных организаций:

1. Ғаиләм (Моя семья) – для всех возрастных групп, посвященный семейным традиционным ценностям башкирского народа.
2. Уйнайыҡ (Поиграем) – для всех возрастных групп. Развитие языковых компетенций посредством игровых форм.
3. Аралаш (Общение) – для средней и старшей групп. Развитие речи путем организации диалогов, дошкольных театров на башкирском языке.
4. 100 һүҙ (100 слов) – для средней и старшей групп. Определение лексического минимума самых употребляемых башкирских слов.
5. Бейейек (Потанцуем) – для старшей группы. Ознакомление с башкирскими народными танцами.
6. Полиглот (Полиглот) – для старшей и подготовительной групп. Организация занятий на одном иностранном и башкирском языке, ознакомление с культурами народов мира.
7. Атайсал (Малая родина) – для старшей и подготовительной групп. Ознакомление детей с историей и культурой Башкортостана.

Каждый модуль распределен помесячно. Каждый месяц предлагаются различные формы работы с детьми дошкольного возраста с использованием наглядного материала.

# «Ғаиләм» модуле

Ғаилә - ул социаль институт, ул йәмғиәттең туғанлыҡ, никах мөнәсәбәттәре менән бәйле кешеләрҙән торған төп өлөшө булып тора.

Ғаилә халыҡ педагогикаһында айырым урын биләй, сөнки ул традицион ғаиләлә тәрбиә биреү тәртибен, уның йөкмәткеһен билдәләүсе тәбиғи мөхит булараҡ ҡаралған. Өйҙә тәрбиә биреү ғаиләнең билдәле бер тәртибен, уның йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, байрамдарын тәьмин итә.

Ғаилә баланың социаль ғәҙәтен тәрбиәләүҙең төп элементтарының береһе булып тора.

Был модулдә мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа ғаилә төшөнсәһе менән танышыу ярҙамында әхлаҡи-патриотик тойғолар тәрбиәләү эше, ғаиләнең әһәмиәтлелек дәрәжәһе аша ғаилә тураһында, туғандарса мөнәсәбәттәр, ролдәр тураһында һөйләү, ғаиләләге урын, шулай уҡ ысын һәм буласаҡ ғаилә ролдәре тураһында аңлатыу эшен алып барыу ҡаралған.

**Кескәйҙәр төркөмөнөң балаларын ғаилә менән таныштырыу:**

Үҙ исемдәрен, ғаилә ағзаларының исемдәрен атарға өйрәтеү. Балаларҙың һүҙлек запасын башҡорт телендә (әсәй, атай, олатай, өләсәй, ағай, апай, һеңле, ҡусты) байытыу. Ғаиләләренә һөйөү тәрбиәләү, ғаилә ағзаларының бер-береһен ҡәҙерләүе тураһында һөйләү.

**Урта төркөм балалары:**

Һүҙлек запасын байытыуҙы дауам итеү. Туғандарына, яҡындарына ярҙам итеү теләген тәрбиәләү. Ғаиләнең, ғаилә ағзаларының нимә икәнен, һәр ғаилә ағзаһының үҙ вазифаһы барлығын аңлатыу эше.

**Өлкән һәм әҙерлек төркөмө балалары:**

Туғандарға, яҡындарға хисле ҡараш, ярҙам итеү теләген тәрбиәләүҙе дауам итеү. Балаларҙың ғаилә тураһында (ғаилә йолалары, тарихы) ҡарашын киңәйтеү. Туғанлыҡ мөнәсәбәттәре тураһында һөйләү (инәй, ике туғандар). Исем-шәрифтәрен, атай-әсәләренең исемен белеүен нығытыу. Шәжәрәгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, шәжәрә, ғаилә тарихы һәм халыҡ йолалары тураһында аңлатыу эше.

## Өҫтәл арты уйындары

**«Беҙҙең ғаилә»**

**Маҡсат:** ғаилә, ғаилә ағзалары, туғандар тураһында төшөнсәләрҙе формалаштырыу.

**Әҙерлек эше:** алдан балалар менән ғаилә темаһына һөйләшеү, аңлатыу эштәре алып барыла.

**Йыһазландырыу:** ҡумта, ҡулсыҡ театры «Башҡорт ғаиләһе».

**Уйын барышы**

**Тәрбиәсе:** Балалар, ҡарағыҙ, был ниндәй ҡумта, эсен асып ҡарайыҡ әле. (Ҡумта эсендә ҡулсыҡтар). Был бит үҙенсәлекле театр! Һеҙҙең алда башҡорт ғаиләһе ҡулсыҡтары ята. Һәр ҡулсыҡтың үҙенең персонажы, олатай-өләсәһе, атаһы, әсәһе, ҡыҙҙары, улдары бар. Һеҙгә төрлө персонажды һайлап, ҡулсыҡтар кейергә тәҡдим итәм. Мин һеҙгә һорауҙар бирәм, ә һеҙ, ҡулдарығыҙға кейгән ҡурсаҡтарҙы күрһәтеп, һорауҙарға яуап бирерһегеҙ, хәрәкәттәр башҡарырһығыҙ. Иғтибарлы булығыҙ.

- Кем өй йыйыштыра, иҙән йыуа? (әсәй)
- Кем һеҙгә өйҙә ашарға бешерә? (әсәй)
- Өйҙә кем бар нәмәне йүнәтә? (атай)
- Кем уйынсыҡтар һатып ала (атай, әсәй)
- Кем иртән уятып, һеҙҙе балалар баҡсаһына алып бара? (олатай, өләсәй, атай, әсәй)
- Кем һеҙҙе наҙлап үбеп ала? (әсәй)
- Кем тәмле бәлеш бешерә? (өләсәй)
- Кем матур итеп йылы ойоҡтар, бейәләйҙәр бәйләй? (өләсәй)
- Кем менән уйындар уйныраға ярataһығыҙ? (ағай, апай, һеңле, ҡусты)
- Барыһы бергә нисек атала? Нимә ул? (ул минең ғаиләм)

**Тәрбиәсе:** Бик яҡшы балалар, афарин!

Балаларға үҙ аллы һүҙбәйләнештәр, һөйләм төҙөргә тәҡдим итергә була. Был ҡулсыҡтар менән уйындар, театрлаштырылған тамаша уйлап табырға мөмкин.

**«Минең ғаиләм»**

**Маҡсат:** балаларҙың ғаилә составы, туғанлыҡ бәйләнеше тураһында күҙаллауҙарын киңәйтеү.

**Йыһазландырыу:** интерактив панель.

**Уйын барышы:** уйын интерактив панель аша ойошторола. Лексика бүлеген файҙаланып үткәрергә мөмкин. Тәүге биттә ғаилә ағзалары менән танышыу ҡаралған.

- Балалар, был һүрәттә кем төшөрөлгән тип уйлайһығыҙ? (һәр бер ғаилә ағзаһын атап үтелә)

- Айгөл, һеҙҙең ғаиләлә кемдәр йәшәй?

- Азамат, әсәйҙәрҙе яратып нисек өндәшәбеҙ?
- Ә беҙҙең атайҙар ниндәй? Һ.б.




**Башҡорт тирмәһе бизиборды**

**Маҡсат:** балаларҙы башҡорт халҡының мәҙәниәте һәм ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыу. Тирмә - башҡорт халҡының боронғо йәшәү урыны булыуы тураһында аңлатыу.

**Бурыстар:** балаларҙың башҡорттарҙың көнкүреш үҙенсәлектәре, тирмә (уның ҡоролошо, интерьер үҙенсәлектәре, биҙәү үҙенсәлектәре) тураһында белемен нығытыу;

Башҡорт халҡының йолаларына, башҡорт халыҡ ижадына ҡыҙыҡһыныу, башҡа халыҡтарҙың йолаларына ихтирам тәрбиәләү;

Балаларға аңлатыу эшен алып барғанда фотоһүрәттәр, видео, һүрәттәр, макет ҡулланырға була

**Дәрес барыуы**

**Тәрбиәсе:** Балалар! Бөгөн мин һеҙгә тирмә тураһында һөйләйем. Бәлки кемдер беләлер, нимә ул тирмә? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, тирмә ул башҡорт халҡынының кусмә йорто. Тирмәлә башҡорттар яҙҙан алып көҙгә тиклем йәшәгән. Башҡорт халҡы күсмә халыҡ булған, шуға күрә тирмәне ташыуы бик уңайлы булған, шул уҡ ваҡытта ул көслө елдәрҙә бирешмәгән, һыуыҡта йылы, эҫелә һалҡын булып ҡалған. Иң яҡшы кейеҙ киҫәктәрен стеналар ҡаплау һәм түбә ябыу өсөн файҙаланғандар. Төньяҡҡа ҡарап торған яҡты нығыраҡ йылытҡандар.

Был һалҡын елдәрҙән һаҡланыу өсөн эшләнгән. Тирмәнең ҙурлығынан хужаһының бай, етеш икәнлеген аңларға булған. Балаҫтар торлаҡты йылытыу өсөн файҙаланылған.

**Тәрбиәсе:** Балалар, тирмәненң эсен ҡарайыҡ әле (макет, һүрәт). Тирмә, ике өлөшкә бүленә: ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәр яғы.

Торлаҡтың ҡатын-ҡыҙҙар өлөшө бәләкәйерәк булған. Ул ишектең уң яғында урын алған. Тирмәнең был яғында төрлө хужалыҡ кәрәк-яраҡтары һәм ҡатын-ҡыҙ кейеме урынлашаҡан.

Ир – егеттәр яғы, ҡатын – ҡыҙҙар яғына ҡарағанда, ҙурыраҡ булған. Ул ҡунаҡтарҙы ҡабул итеү бүлмәһе булған. Ғәҙәттә, тирмәнең был өлөшө төрлө туҡымалар: келәм, ашъяулыҡ, таҫтамал менән биҙәлгән. Бынан тыш, бында ир-егеттәрҙең бөтә мөлкәте – ҡоралдары һаҡланған.

**Тәрбиәсе:** Ҡарағыҙ әле, нимә алып килдем? (Бизиборд юрта). Әйҙәгеҙ, уйнап алайыҡ.

Тәрбиәсе, бизиборд тирмәнең элементтарын күрһәтә, балаларға тотторол ҡарата һәм нимә икәнен аңлата. Ниндәй төҫтә? Һәм башҡа һорауҙар бирә. Балалар күрһәтә, яуаптар ҡайтара.

## Башҡорттарҙың милли кейеме менән таныштырыу

**Маҡсаты:** Балаларҙы милли кейем менән таныштырыу. Уйын аша баланың телмәрен, әхлаҡи, социаль үҫешен арттырыу.

**Материал:** ҡурсаҡтар, иллюстрациялар, һүрәттәр.

Алдан башҡорт милли кейемдәре, биҙәүҙәре тураһында аңлатыу эшен алып барыу.

**Уйын барышы.**

**Тәрбиәсе:** Балалар, ҡарағыҙ әле, кемдәр беҙгә бөгөн ҡунаҡҡа килде. Был ҡурсаҡтар Салауат һәм Айһылыу.

**Тәрбиәсе:** Ниндәй кейем кейгәндәр? Был башҡорт халҡынының милли кейемдәре. Айһылыуҙың күлдәге ниндәй (оҙон, оҙон еңле..), ниндәй төҫтә? (яуаптар). Тағын нимә кейгән? (камзул). Сәстәрен икегә үргән, башындағы биҙәүес ҡашмау тип атала. Ҡашмау – башҡорт ҡатындарының милли биҙәүесе, ҡашмауҙы тәңкәләр, мәрйендәр менән биҙәгәндәр.

**Тәрбиәсе:** Хәҙер инде Салауаттың кейемен ҡарайыҡ. Ниндәй кейем кейгән? (яуаптар), ниндәй төҫтә? (яуаптар). Салауаттың өҫтөндәге кейем елән тип атала, ул башҡорт ир-егеттәренең милли кейеме. Еләндең нисек биҙәлгәнен ҡарайыҡ (аңлатыу, һорауҙар, яуаптар). Күлдәге ниндәй төҫтә? (яуаптар). Итектәрен ҡарағыҙ әле, башҡорттар аяҡ кейемдәрен тиренән теккәндәр. Ә башында баш кейеме – бүрек тип атала, йәнлек тиреһенән, өсмөйөш формаһында тегелгән.

Аҙаҡтан йомғаҡ яһау, фекер алышыу.

### Ата-әсәләр менән берлектә эшләнгән проект эше «Шәжәрә»

**Маҡсат:** Балаларҙы халҡыбыҙҙың, ата-бабаларыбыҙҙың йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыу, ғаиләгә һөйөү һәм оло быуынға хөрмәт тәрбиәләү.

**Проект этаптары.**

1. Тәрбиәләнеүселәргә шәжәрә тураһында аңлатыу, балалар менән ата-әсәләрендә үҙҙәренең шәжәрәһенә, туғандарына. ҡыҙыҡһындырыу уятыу.
2. Шәжәрәне (ағас һүрәте рәүешендә) биҙәүҙе аңлатыу. Ата-әсәләр һәм балаларҙың берҙәм эштәре.
3. Һөҙөмтәләр менән таныштырыу. Балаларҙың һәм ата-әсәләрҙең эшмәкәрлеге: презентация формаһын һайлайҙар һәм тәҡдим итәләр; презентация әҙерләйҙәр, проектты яҡлайҙар йә балалар ғына, йә ата-әсәләр менән бергә (ирекле һайлау). Проект эшенең һөҙөмтәләрен яҡлау.
4. Йомғаҡ яһау.

# «Уйнайыҡ» модуле

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа донъяны танып белеү уйын аша бара. Шуға күрә мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларында уйын әүҙемлеген ойоштороу иң мөһим урында тора.

Балалар баҡсаһында уйын технологиялары баланы әүҙемләштерә, тирә-йүнгә ҡыҙыҡһыныуын арттыра, хәтерҙе, фекерләүҙе һәм иғтибарлыкты үҫтерә. Уйын барышында үҙләштерелгән белем балалар хәтерендә оҙаҡ һаҡлана.

Уйын эшмәкәрлеге - балаларҙы төрлө яҡлап тәрбиәләү һәм үҫтереү сараһы. Тап уйын барышында мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың төп психик функциялары, баланың шәхес сифаттары (лидерлыҡ, үҙаллылыҡ, әүҙемлек һ. б.) формалаша.

Уйын - ул баланың тәбиғи торошо, ул һәр саҡ инициатива, фантазия, хис-тойғолар. Уйын барышында көтөлмәгән күңелле ваҡиғалар ғәҙәтигә әүерелә.

Уйындар - балаларҙа аралашыу һәм йәмғиәттә үҙ-ара килешеп эш итеү оҫталыҡтарын булдырыуҙың мөһим элементы. Балаларҙың уйнауы - ул күңел асыу, телмәр үҫтереү һәм үҙ-ара аралашыу һәләтен үҫтерә.

Балаларға еңел бирелгән берҙән-бер тел ул - уйын теле.

### Тауыш оҡшатыу уйыны («Звукоподражание»)

(Авторы: И.Ф.Байегетов).

Тауышҡа оҡшатыу - телмәр функцияһы үҫешенең башланғыс этабы.

Һүҙҙәр һәм тауыш оҡшашлыҡтары арҡаһында карточкалар логик фекерләүҙе үҫтерә, ә һүҙҙәр еңел хәтерҙә ҡала. Был уйын баланың һөйләшеүенә генә түгел, һөйләй белгән баланың телмәрен байытырға ла ярҙам итәсәк.

Тәҡдим ителгән материалдар һүҙҙәрҙе тауыш оҡшатыу аша хәтерҙә ҡалдырыуҙың ассоциатив ысулы, башҡорт телендә йәнлектәр, ҡоштар, предметтар һәм күренештәр атамаһына оҡшашлыҡ итеп эшләнгән.

Балалар төрлө предметтарҙы, ҡоштарҙы һәм йәнлектәрҙе күреп белеп кенә ҡалмай, ә уларҙың нисек «һөйләшкәндәрен» ишетеп, ҡабатлап, телмәр оҫталығын үҫтерә ала.

**Маҡсат:** Ишетеү иғтибарын формалаштырыу, өндәрҙе һәм һүҙҙәрҙе ҡабатлай белеү, һүҙҙәрҙе ассоциатив ысул менән хәтерҙә ҡалдырырға өйрәнеү.

**Йыһазландырыу:** Карточкалар

**Уйын барышы**

Карточканың һүрәт төшөрөлгән яғын күрһәтәбеҙ, йәнлектәрҙең, ҡоштарҙың, предметтарҙың исемен ымлыҡ ысулы менән аңлатып күрһәтер кәрәк.

**Тәрбиәсе:** Балалар! Ҡарағыҙ әле, ниндәйҙер ҡумта ултыра, әйҙәгеҙ, эсен асып ҡарайыҡ.

**Тәрбиәсе:** Бында бит төрлө-төрлө һүрәттәр. Әйҙәгеҙ, ҡарап үтәйек.

**Тәрбиәсе:** Был ниндәй ҡош? (күркә). Күркә күрк-күрк итеп тауыш сығара, әйҙәгеҙ бергәләп ҡабатлайыҡ – күрк-күрк – ул күркә. Күрк-күрк, күркә күркелдәй.

**Тәрбиәсе**: Ә был? Кәкүк, кәкүк – кә-күк тип ҡысҡыра, кем ишеткәне бар? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Өкө, өкө – уһу-уһу (өһө-өһө) тей, ҡабатлайыҡ әле, афарин!

**Тәрбиәсе:** Ә был ҡош - ҡарға, һеҙ был ҡош нисек тауыш биргәнең һис шикһеҙ ишеткәндерһегеҙ, тип уйлайым. Ҡар-ҡар - ул ҡарға, дөрөҫ.

**Тәрбиәсе:** Был бәләкәй генә нимә ул? Себеш, дөрөҫ, себеш сип-сип тип өндәшә, бергәләп ҡабатлайыҡ сип-сип-сип.

**Тәрбиәсе:** Ҡарағыҙ әле, был нимә? Эйе, бәрәс, ул бә-ә тей – бә-ә-рәс.

**Тәрбиәсе:** Күмәкләп сәпәкәй итәйек әле, ниндәй тауыш сыға? (яуаптар). Бик яҡшы, эйе сәп-сәп итеп ишетелә. Ҡарағыҙ был һүрәттә ҡулдар төшөрөлгән, улар сәпәпкәй итә. Сәп-сәп сәпәкәй – ҡабатлайыҡ.

**Тәрбиәсе:** Ә был һүрәттәге малай һыу менән биҙрә күтәргән. Саҡ күтәреп тора. Уға ул биҙрә нисек? Эйе, ауыр, күтәргәндә ауу тей. Ауыр. Ҡабатлайыҡ әле. Ауу-ауы-ыр.

**Тәрбиәсе:** Ә был малай эсен тотҡан, нимә булған икән? Уның эсе ауырта, ул да ау тей. А-у-у ауырта.

**Тәрбиәсе:** Бж-ж тип тауыш бирә, әйҙәгеҙ, ҡабатлайыҡ бергә бж-ж бж-ж тауыш сығара бж-ж бж-ж - бөжәк, бик яҡшы, был һүрәттә бөжәк төшөрөлгән.

**Тәрбиәсе:** Был йәнлек, ниндәй тауыш сығара кем әйтә? Баҡ-баҡ – баҡа, дөрөç, ҡабатлайыҡ әле, баҡ-баҡ - баҡа.

**Тәрбиәсе:** Беҙ ҡаты таҡтаға һуҡһаҡ, таҡ – таҡ тигән тауыш сыға, ҡабатлайыҡ таҡ-таҡ-таҡ – таҡта, афарин!

**Тәрбиәсе:** Төҙөлөш эштәрен эшләгәндә, др-р тигән тауыш сығара дрель. Ҡабатлайыҡ әле, др-р др-р дрель, бик яҡшы.

**Тәрбиәсе:** Тр-р, тр-р тауыш сығарып трактор килә алыçта, ҡарағыҙ әле, әйҙәгеҙ ҡабатлайыҡ тр-р, тр-р – трак-тор. Бик яҡшы!

**Тәрбиәсе:** Ә был музыка ҡоралы думбр-думбр тип тауыш сығара, думбр-думбр – думбыра тип атала. Ҡабатлайыҡ әле думбр-думбр – думбыра.

**Тәрбиәсе:** Һәм аҙаҡҡы карточка, нимә төшөрөлгән, ергә төшһә, туп-туп тип тауыш бирә, туп-туп исеме лә туп тип атала, ҡабатлайыҡ әле, туп-туп ул була туп. Афарин балалар!

## Мин башҡортса һөйләшәм

**Маҡсат:** балаларҙың һүҙлек запасын үçтереү, башҡорт телендә һөйләшергә өйрәнеү.

«Мин башҡорт телендә һөйләшәм» уйыны ярҙамында балалар һүҙлек запасын киңәйтә, башҡорт телендә ябай һөйләмдәр менән һөйләшергә, өлгө һәм схемалар буйынса хикәйәләр төҙөргә өйрәнә, ваҡыт һаны кеүек категориялар менән файҙалана ала.

Уйында 13 вариант ҡаралған. Уйнарға өйрәнеү бик ябай. Карталарҙы үҙ-ара ҡушығыҙ, улар ярҙамсы схема ярҙамында төҙөлә. Тәүге этаптарҙа карта-схемалар менән файҙаланырға була. Артабан схемалар менән файҙаланмаçҡа мөмкин.

Мәçәлән: Шыршы үçә. Малай алма ашай. Малай тәмле һөт эсә. Гөлназ һәм Азамат уйнайҙар. Гөлназ Азамат менән уйнай.

## Һабантуй байрамы.

**Маҡсат:** Һабантуй милли байрамы менән танышыу, башҡорт халҡының йолаларына ҡыҙыҡһыныу уятыу.

**Йыһазландырыу:** АЛМА Интерактив панеле (төбәк компоненты)

**Дәрес барышы.**

**Тәрбиәсе:** Балалар! Һеҙ ниндәй байрамдар беләһегеҙ? (яуаптар)

**Тәрбиәсе:** Бөгөн башҡорт милли байрамы - һабантуй менән танышабыҙ. Һабантуй – һабан һәм туй һүҙенән алынған. Ул яҙғы сәсеү тамамланғандан һуң үткәрелә.

Һабантуй - ул уңдырышлылыҡ һәм муллыҡ, хеҙмәт, шатлыҡ һәм бәхет байрамы, башҡорт халҡының иң сағыу, иң күңелле һәм яратҡан байрамы.

Балаларға интеркатив панелдә Һабантуй бүлеген күрһәтергә, был бүлектә башҡорт телендә Һабантуй ниндәй байрам, нисек үткәрелә һәм ниндәй уйындар ойошторолоуы тураһында аңлатыла.




**Тәрбиәсе:** Һабантуйҙа балалар һәм өлкәндәр көс һәм етеҙлектә һынаша, ярыш формаһында уйындар үткәрәләр. Әйҙәгеҙ, ниндәй уйындар уйнайҙар, ниндәй ярыштар булғанын ҡарап сығайыҡ. (слайд).

Мәҫәлән:




Һәр уйын ике телдә аңлатылған. Балаларға тыңлатырға, аңлатырға, һорауҙар биреп фекерҙәр менән алышырға.

Шулай уҡ был бүлектә пазл уйыны бар, һабантуйҙа үткәрелгән уйындарҙы, ярыштарҙы пазл кеүек йыйырға мөмкин. Йомғаҡ яһап, фекерҙәр менән алышынғас, балаларға пазлды экранда йыйырға тәҡдим итергә.

Мәҫәлән:




## Түбәтәйҙе буя

**Маҡсат:** балаларҙы милли кейем менән таныштырыуҙы дауам итеү, һүҙлек запастарын үҫтереү.

**Йыһазландырыу:** АЛМА интерактив панеле (төбәк компоненты), башҡорт кейемендәге ҡурсаҡ, түбәтәй, камзул.

Алдан балалар менән милли байрамдар тураһында әңгәмә, милли кейемендә ҡурсаҡтар, һүрәттәр ҡарау.

**Дәрестәр барышы.**

**Тәрбиәсе:** Балалар! Бөгөн беҙҙә Салауат һәм Айһылыу ҡурсаҡтары ҡунаҡта. Улар менән бергә түбәтәйҙе буяйбыҙ. Тәүҙә, халыҡтар һәм милли кейемдәр тураһында һөйләшеп алайыҡ.

**Тәрбиәсе:** Беҙҙең республикла ниндәй милләттәр йәшәй? (башҡорттар, татарҙар, урыҫтар һ.б.).

**Тәрбиәсе:** Һәр халыҡтың үҙ милли мәҙәниәте, кейемдәре бар.

**Тәрбиәсе:** Салауат (ҡурсаҡ) нимә кейгән? (балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Ә хәҙер Айһылыуҙың (ҡурсаҡ) кейемен ҡарайыҡ (балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Хәҙер мин һеҙгә баш кейеме түбәтәй һәм уның орнаменты тураһында һөйләйем. (түбәтәй күрһәтергә).

Түбәтәй - ул мосолмандарҙың, шул иҫәптән башҡорттарҙың һәм татарҙарҙың традицион баш кейеме. Биҙәлеше буйынса төрлө орнаменттарҙан һәм төҫтәрҙән тора (түбәтәй күрһәтергә).

Башҡорт халҡының орнаменттары улар мөгөҙ, тулҡын, һыу. Өлкән йәштәге ир-егеттәр ҡара түбәтәй кейгән, йәш ир-егеттәр - төҫлө (ҡыҙыл, йәшел, күк) бәрхәттән тегеп кейгән(түбәтәй күрһәтергә).

**Тәрбиәсе:** Балалар, Салауат һәм Айһылыу, түбәтәйҙе биҙәү буйынса ярҙам һорайҙар. Әйҙәгеҙ, ярҙам итәйек. (АЛМА интерактив панелендә эш башҡарыу).




## Башҡорт халыҡ уйындары

Халыҡ уйындары, традицион башҡорт уйындары үҙ тарихына эйә, улар быуындан быуынға күсә килә. Күп кенә милли байрамдар уйынһыҙ үтмәй.

**Маҡсат:** башҡорт милли йолаларына ҡыҙыҡһыныу уятыу, тыуған төйәккә һөйөү тәрбиәләү.

**Бурыстар:**

1. Башҡорт уйындарының төрлөлөгө тураһында белемде арттырыу;

2. Балаларҙа башҡорт халҡының милли мәҙәниәтенә, йолаларына һәм уйындарына йылы мөнәсәбәт тәрбиәләү;

3. Балаларҙа әүҙемлек, һөйләшә белеү, тиҫтерҙәренең фекеренә ҡолаҡ һалыу һәләтен үҫтереү.

Мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында традицион башҡорт уйындарын ойоштороу.

Иң беренсе балалар менән халыҡ уйындары тураһында әңгәмә, уйындарҙы һайлау һәм өйрәнеү эшен үткәреү, йыһазландырыу эше.

Төркөмдәр өсөн уйындар исемлеге:

**Кесе төркөм:**

«Бүре һәм ҡуян»

«Яулыҡ йәшерегеҙ»

«Уҡ»

**Урта төркөм:**

«Аҡ тирәк, күк тирәк»

«Тирмә»

«Сысҡан менән бесәй»

«Ҡалаҡтар менән йүгереү» (теннис тубы)

**Өлкән, әҙерлек төркөмө:**

«Осто-осто»

«Ҡурай»

«Энә һәм еп»

«Йәбешкәк бүкәндәр»

«Тоҡ кейеп йүгереү»

## Башҡорт телен планшет менән өйрәнәбеҙ

**Өндәр донъяһында.**

**Маҡсат:** Өндәр өйрәнеү, ҡаты менән йомшаҡ билдәһен айыра белергә.

**Уйын барышы**

Планшетта тауыш схемаларын төҙөү, һүҙҙең ниндәй өндәрҙән башланыуын өйрәтеү. Мәҫәлән: өкө [ө], үлән [ү] һ.б.

## Һүҙҙәр төҙө

**Маҡсат:** Хәрефтәрҙән һүҙҙәр төҙөп өйрәнергә.

**Уйын барышы.**

Һүрәткә ҡарап планшетта хәрефтәр табырға. Мәҫәлән: һүрәттә – өй, планшетта «ө» һәм «й» хәрефен табырға, «әтәс» – ә-т-ә-с һ.б.

## Өфө бизиборды.

**Маҡсат:** Балаларҙың танып белеү үҫешен формалаштырыу.

**Уйын барышы.**

**Тәрбиәсе:** Балалар, беҙ ниндәй ҡалала йәшәйбеҙ? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, Өфө тип атала беҙҙең ҡалабыҙ. Быйыл Өфөгә 450 йыл булды.

**Тәрбиәсе:** Һеҙҙең алдығыҙҙа Өфө бизиборды. Әйҙәгеҙ, уйнап алайыҡ.

Балаларға үҙ аллы уйнарға бирергә, уйын барышында тәрбиәсе аңлатыу эшен алып бара, ҡайҙа ниндәй элемент, мәҫәлән, Дуҫлыҡ монументы тураһында һөйләргә була.

# «Аралаш» модуле

Аралашыу - бер-береңде аңлауға һәм ҡабул итеүгә нигеҙләнгән мәғлүмәт менән алмашыу һәм кешеләр араһында үҙ-ара килешеп эш итеү процесы. Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн аралашыу - ул үҫеш сараһы ла булып тора. Ул балаларҙа социаль, интеллектуаль сифаттарҙы, шәхес үҙенсәлектәрен, балаларҙың телмәрен үҫтерә. Аралашыу аша балалар туған телдә һүҙҙәр үҙләштерә.

Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн диалог - ул туған телде өйрәнеү ысулы.

### Ҡарға бутҡаһы

**Маҡсат:** Туған телгә һөйөү тәрбиәләү, телде әүҙем үҙләштереү һәм аралашыу барышында балаларҙың үҙ-ара аралашыуын ойоштороу.

**Йыһазландырыу:** Ҡурсаҡтар йыйылмаһы.

**Уйын барышы**

**Тәрбиәсе:** Балалар, ҡарағыҙ әле, был ҡумтала нимә бар икән, туҡылдатып ҡарайыҡ әле. Туҡ-туҡ-туҡ, асылмай, тағын берҙе, туҡ-туҡ-туҡ. Был ҡумтала ҡурсаҡтар, әйҙәгеҙ, бергәләп башҡорт байрамы Ҡарға бутҡаһы тураһында ҡурсаҡ театрын күрһәтәйек. (рольдәрҙе бүлешергә).

**Олатай:** Ҡыш та бөттө, ҡарҙар ирене, йылғалар аҡты. Көндәр оҙонайып, төндәр ҡыҫҡарҙы. Был миҙгел ни тип атала?

**Ҡыҙ,малай:** Яҙ.

**Өләсәй:** Дөрөҫ

**Олатай:** Борон борондан кешеләр, яҙҙы ҡарғалар үҙ ҡанаттарында алып килә, тип һанағандар. Шуға, ҡарҙар иреп, йылғалар ағып, ҡарғалар осоп килеүенә бағышлап Ҡарға бутҡаһы тигән байрам үткәргәндәр.

**Малай:** Ҡарға ҡар-ҡар тей, ҡарға ул ҡара төҫтә, ҙур ҡош, эйеме, олатай?

**Олатай:** Эйе, дөрөҫ, улым.

**Өләсәй:** Байрамға барғығыҙ киләме?

**Ҡыҙ, малай:** Эйе,эйе.

**Әсәй:** Байрамда бутҡа бешерәбеҙ, шуға беҙгә ярма алыр кәрәк, өҫтәлгә тәмле- тәмле ризыҡтар бешерәйек.

Балалар, олатай, өләсәй, атай, әсәй бергә йыйылып урманға байрам үткәрергә китәләр.

**Өләсәй:**Ҡайһылай күп кешеләр йыйылған, барыһы ла байрамға килгән, яҙҙы ҡаршы алырға

**Атай:** Мин утын әҙерләйем, ҡаҙан алайым.

**Әсәй:** Мин ашарға әҙерләйем

**Ҡыҙ:** Әсәй, атай, мин балар менән уйнайым.

**Малай:** Мин дә уйнайым, улар аҡ тирәк, күк тирәк уйнарға йөрөйҙәр.

**Әсәй:** Балаларым, барығыҙ уйнағыҙ, бейегеҙ.

Бейеп, уйнап, көлөп, тәмле бутҡа ашап, аҙаҡтан ҡалған бутҡаны ағас төптәренә ҡарғаларға ашарға һалалар.

**Өләсәй:** Бутҡа һалғанда теләк теләп һалырға кәрәк

Ашағыҙ, туйығыҙ,
Илгә именлек килтерегеҙ!
Бер бойҙайға — ун бойҙай
Ун бойҙайға — мең бойҙай! - тип әйтеп һала.

## Башҡорт телендә донъя халыҡ әкиәттәрен башҡарыу

**Маҡсат:** Балаларҙың ижади һәләттәрен асыу, бәйләнеш телмәрен үҫтереү.

**Үткәреү**

Тематик костюмдарҙа сығыш яһау һәм ролдәр буйынса әкиәт башҡарыу йәки тасуири уҡыу-һүрәтләү, аудитория менән эш итә белеү, импровизациялау, музыкаль биҙәлеш.

## «Һомай» колонкаһын ҡулланыу

Һомай – башҡорт һәм урыҫ телен аңлаған, ике телдә лә һөйләшкән тауыш ярҙамсыһы.

Сифаттары.

Сиратлап һөйләшергә һәм ишетә белеү оҫталығының үҫтереү.

Аудиоаңлау.

Телмәр үҫтереү.

Балалар баҡсаһында тауыш ярҙамсыһын тәү сиратта мәғлүмәт сығанағы итеп ҡарарға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта, әле уҡый-яҙа белмәгән балаларға идара итә алырлыҡ сығанаҡ.

Һомай менән аралашыу, мәғлүмәтте ҡабул итергә, һорау әҙерләргә өйрәнергә өйрәтә, оялсан һәм ҡыйыу булмаған балаларға психологик яҡтан ҙур ярҙамсы булып тора.

Һомай колонкаһын ҡулланыу ысулы бик ябай. Ике телдә лә һорауҙар, командалар бирергә, мәғлүмәт алырға, балаларға йырҙар, башҡорт халыҡ әкиәттәрен ҡуйырға, төрлө һорауҙар биреп әңгәмә ойошторорға була.

## Әкиәттәр

**Маҡсат:** балаларҙың телмәрен үҫтереү, башҡорт халыҡ әкиәттәренә ҡыҙыҡһындырыу үҫтереү.

**Йыһазландырыу:** Башҡорт әкиәттәре комплекты.

**Тәрбиәсе:** Балалар! Бөгөн әкиәт донъяһына барайыҡ, ҡарағыҙ әле, ниндәй башҡорт әкиәт комплекты бар миндә.

«Рәхмәтле ҡуян» әкиәтен һеҙгә мин һөйләйем, ә һеҙ миңә ярҙам итегеҙ.

**«Рәхмәтле ҡуян».**

**Тәрбиәсе:** Байрам көндө ата-әсәһе бәләкәй улын ҡунаҡ саҡырырға ебәрә: «Шул ағай-олатайҙы, был кейәүҙе саҡыр...» һәм уға шул тиклем күп исемдәр ҡуша, хатта хәтерҙә лә ҡалдырмай.

**Тәрбиәсе:** Балалар, ата-әсәһен һәм малайҙы табығыҙ (балалар фигураларҙы үҙҙәре йәбештерә).

Тыңлаусан малай тышҡа йүгереп сығып китә лә, кемде ҡунаҡҡа саҡырырға ҡушҡандарын шунда уҡ онота. Кире ҡайтып, ҡабаттан һорарға ҡыймай. «Әлегә барлыҡ ауыл урамдарынан саҡырам, шулар араһында миңә саҡырырға ҡушҡан кешеләр ҙә булыр», – тип уйлай ҙа, саҡырырға китә. Ул, ҡунаҡҡа саҡырып, ауыл урамдары һәм тыҡрыҡтарының ике яғы буйлап бөтә өйҙәрҙе йөрөп сыға. Барыһы ла рәхмәт белдереп, килергә һүҙ бирә. Малай өйөнә ҡайта.

Йола буйынса был көндө ҡунаҡтар йыйыла башлай. Ауыл халҡы, бер-бер артлы йыйылып, һый-ниғмәт көтә. Ата-әсәһе ҡурҡа: ҡайҙан алырға ул тиклем ризыҡты? Нисек уларҙы һыйларға? Малай ата-әсәһенә, кемде саҡырырға икәнен оноттом, ти, шуға бөтә ауылды саҡырғанын әйтә. Ҡунаҡтар һый көтәләр. Булған аҙыҡтарын өҫтәлгә ултырталар, тик ул әҙ булғанын, ата-әсәһе лә, малай үҙе лә күреп тора.- Эшеңде үҙең боҙҙоң, үҙең төҙәт! - ата-әсәһе малайына.

Ата-әсәһенең күңелен ҡыйғанға, малай илап ебәрә. Илай-илай өйҙән тышҡа сығып китә, һуңынан урманға йүгерә. Иҫке төпһәгә ултырып ҡайғыра. Һәм ҡуян дуҫының уға йүгереп килгәнен күреп ҡала. (балалар ҡуянды йәбештерәләр).

**Тәрбиәсе:** Был ҡуянды малай өйҙә үҫтергән, сөнки ҡуян етем булған, ә һуңынан, ул үҫкәс, урманға ебәргән. Малай янына ҡуян йүгереп килә лә эргәһенә ултыра. Малай ҡуянға үҙенең ҡайғыһы тураһында һөйләп бирә.

Тыңлап бөтә лә, оҙон ҡолаҡтарын ҡыбырлатып, артҡы тәпәйҙәренә баҫа, малайҙың ҡулдарын һыйпап:

- Ярай, ҡайғырма, дуҫҡай! Бар өйөңә ҡайт - барыһы ла буласаҡ -, тип, ҡуян урманға йүгереп китә.

Малай, ҡуяндың һүҙен тыңлап, өйөнә ҡайтып китә. Ә унда ҡунаҡтар өйҙәге бөтә тәмлекәстәрҙе ашап-эсеп бөткән дә һаман ҡайтмайҙар икән. Ҡайһы берәүҙәр хужаларҙы, ҡунаҡҡа саҡырҙылар, ә һый-ниғмәт әҙ, тип әрләй башлай. Тантанаға килгәндәр араһында асыулы кешеләр ҙә бар, тегеләр: Аш-һыу әҙ булғас, һәммәһен дә саҡырырға кәрәкмәҫ ине! – ти. Шул саҡ кемдер тәҙрәгә ҡарап, ҡапыл ҡото оса һәм бөтәһен дә ҡарарға саҡыра. Тәүҙә бөтәһе лә ҡурҡты, һуңынан аптырай: был нимә ул? Урам тулы йәнлектәр, барыһы ла өйгә табан килә, һәр йәнлек нимәлер һөйрәп алып килә ята, ти.

**Тәрбиәсе:** (балалар фигураларҙы йәбештерәләр) Айыуҙар бал менән мискә тәгәрәтәләр, бүреләр ит һөйрәгәндәр, боландар мөгөҙҙәренә биҙрәлә һөт элгәндәр, ялмандар һәм йомрандар иген тултырылған тоҡтар тотҡандар, тейендәр һәм ҡуяндар төрлө емеш-еләк һәм сәтләүектәр тулы кәрзиндәрен тотоп киләләр, төлкөләр тештәренә тауыҡ һәм ҡаҙҙар ҡыҫтырып алғандар. Был урман дуҫтарын ҡуян малайға ярҙам итеүҙәрен һораған. Ә ҡуян уларға малайҙың, үҙен үҫтереп, ирекә сығарыуы тураһында һөйләгән. Йәнлектәр һый-ниғмәт йыйғас, ишек алдында тығыҙ булып китә. Йәнлектәр шулай уҡ, күмәкләшеп, ауылдан урманға сығып киткән. Ҡунаҡтар бер һүҙ ҙә әйтә алмай аптырап ҡалған.

Ата-әсәһе лә шатлыҡтан нимә эшләргә лә белмәй ҡалған. Әммә иң ныҡ ҡыуанғаны малай булғандыр. Өс көн һәм өс төн рәттән хужалар ҡунаҡтарҙы һыйлаған. Бөтә ҡунаҡтар ҙа өйҙәренә таралғас, тағы әллә күпме аш-һыу ҡалған. Бына шулай, ҡуян изге күңелле малайға, уны үҫтереп, ирекә сығарғаны өсөн рәхмәт әйткән. Ҡуян да изге күңелле булған.

**Башҡорт әкиәттәре комплекты менән теләгән әкиәттәрҙе балалар менән бергәләп ҡуйырға була.**

# «100 һүҙ» модуле

Башҡорт теле һүҙҙәргә һәм һүҙбәйләнештәргә бай. Балалар һүҙлеген тулыландырыу, дөрөҫ әйтелеш оҫталыҡтарын булдырыу - телмәр үҫешенең дөйөм системаһында төп баҫҡыс ул. Дәрестәрҙә һүҙлек менән эшләү ҙур әһәмиәткә эйә. Ул көн һайын уҙғарыла, һәр тема өйрәнелә. Яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү өсөн уларҙың мәғәнәһен аңлау һәм тәржемәне белеү генә етмәй. Балалар был һүҙҙе аңлы рәүештә телмәрендә ҡулланһа, ул үҙләштерелгән тип иҫәпләнә. Һүҙҙең ныҡлы хәтерҙә ҡалыуы өсөн төп шарт - уның йыш ҡабатланыуы.

Был модулдә беҙ башҡорт телендә йыш ҡулланылған йөҙ һүҙҙе ҡараясаҡбыҙ, был һүҙҙәрҙе билдәләү, үҙләштереү һәм нығытыу.

**100 һүҙ**

**Маҡсат:** Балаларҙың һүҙлек запасын байытыу, өйрәнелгән һүҙҙәрҙе ҡуллана белеү.

**Йыһазландырыу:** Карточкалар, иллюстрациялар, фотоһүрәттәр, «Һомай» колонкаһы.

**Тәрбиәсе:** Балалар, һеҙ башҡорт телендә ниндәй һүҙҙәр беләһегеҙ? (балаларҙың яуаптары).

**Тәрбисәсе:** Тәүҙә, әйҙәгеҙ бер-беребеҙҙе сәләмләгеҙ, һаулыҡ һорашайыҡ һаумы тип бер берегеҙгә ҡарап әйтегеҙ. Кешеләр бер-береһе менән осрашһа «һаумы» тип өндәшер кәрәк.

**Тәрбиәсе:** Беҙ һеҙҙең менән ҡайҙа йәшәбеҙ? (Өфөлә), Өфө – ул ҡала (карточка, һүрәт күрһәтергә, аңлатырға).

**Тәрбиәсе:** Афарин! Балалар, ҡарағыҙ әле, (ғаилә һүрәте йә ҡурсаҡтар йыйылмаһы – башҡорт ғаиләһе), нимә күрәһегеҙ? (атай, ғаилә...).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, ғаилә. Ғаиләлә тәмле ризыҡтарҙы әсәй бешерә (карточка күрһәтергә). Балалар менән ҡабатларға.

**Тәрбиәсе:** Кем ғаиләлә көслө, өйҙәге бөтә ауыр эштәрҙе эшләй? (карточка күрһәтергә) (атай).

**Тәрбиәсе:** Эйе, атай, дөрөҫ!

**Тәрбиәсе:** Ә кем гәзит уҡый, яңылыҡтар ҡарай һәм балалар менән уйнай? Ул олатай. (карточка, һүрәт күрһәтергә).

**Тәрбиәсе:** Ғаиләлә кем һеҙгә әкиәттәр, хәтирәләр һөйләй? Йылы ойоҡ баштар бәйләй? (өләсәй) (карточка, һүрәт күрһәтергә).

**Тәрбиәсе:** Бик яҡшы. Кем һеҙҙең менән уйнай? Кемдәр менән серҙәрегеҙҙе уртаҡлашаһығыҙ? (ағай, апай, ҡусты, һеңле) (карточка, һүрәт күрһәтергә).

**Тәрбиәсе:** Бик яҡшы, был үткән һүҙҙәргә «яратам» һүҙе тап килә (карточка күрһәтергә). Мин ғаиләмде яратам.

**Тәрбиәсе:** Хәҙер мин һеҙгә йомаҡ әйтәм, һеҙ яуабын табып ҡарағыҙ.

Сәстәрендә бантик,
Күлдәк кейгәндәр
Үҙҙәре бигерәк матурҙар
Улар беҙҙең.... (ҡыҙҙар) ҡыҙ - берлектә, күплектә аңлатырға була (карточкалар, һүрәттәр күрһәтеп эш итеү).

**Тәрбиәсе:** Эйе, дөрөҫ. Тағын бер йомаҡ.

Йүгереп, шаян уйнайҙар,
Тотоп алып булмай.

Үҙҙәре көслө, батырҙар,

Улар беҙҙең...(егеттәр) егет - берлектә, куплектә аңлатырға була (карточка, һүрәт күрһәтергә).

**(Һүҙҙәр: ҡала, һаумы, олатай, өләсәй, атай, әсәй, апай, ағай, ҡусты, һеңле, ғаилә, ҡыҙ, егет, яратам).**

**Тәрбиәсе:** Балалар, бөгөн беҙгә ҡунаҡҡа Әлиә килгән (ҡурсаҡ). Ул беҙгә буш килмәгән. Башҡорт телендә һүҙҙәр алып килгән.

**Тәрбиәсе:** Балалар, ҡарағыҙ әле, нимә төшөрөлгән был һүрәттә? (йәнлек һүрәте бесәй, эт, айыу ...). Эйе, былар барыһы бергә йәнлектәр тип атала, ә беҙ һеҙҙең менән «кеше» тип аталабыҙ (карточкалар, һүрәттәр күрһәтергә).

**Тәрбиәсе:** Беҙҙең йәшәгән урыныбыҙ нисек атала? Ә беҙҙең эргәлә торған өйҙә йәшәгән кеше «күрше» тип атала (карточкалар, һүрәттәр күрһәтергә).

**Тәрбиәсе:** Ә өйҙә нимәләр бар? (тәҙрә, ишек, иҙән, баҫҡыс, балаҫ, өҫтәл, ултырғыс, көҙгө). (аңлатып, һүрәттәр, карточкалар күрһәтергә).

**Тәрбиәсе:** Өйҙә бүлмәләр күп, мәҫәлән, йоҡо бүлмәһе, аш-һыу бүлмәһе. Аш-һыу бүлмәһендә беҙ ашарға бешерәбеҙ, ашайбыҙ, унда нимәләр бар? (һауыт, ҡалаҡ, һыу, өҫтәл..) (карточкалар күрһәтергә). Әсәй тәмле аш һәм икмәк бешерә, бүлмәлә тәмле еҫ сығып китә. Аш бешергәндә тоҙ һалабыҙ, ә ул тоҙҙо күп һалһаң, әсе була, һәм һыу ҡоябыҙ. Ғаилә менән күмәкләп ултырып сәй эсәбеҙ, кемдер сәйенә шәкәр һала. (карточкалар күрһәтеп, аңлатырға).

**Тәрбиәсе:** Һеҙ һәр берегеҙ «бала» тип аталаһығыҙ (карточка күрһәтергә). Балалар баҡсаһында, өйҙә, кем әйтә, нимә эшләйһегеҙ? (уйнайым) (карточка күрһәтергә), нимә менән уйнайһың? (уйынсыҡ, ҡурсаҡ).

**Тәрбиәсе:** Бик яҡшы, балалар баҡсаһынан һуң, һеҙ мәктәпкә бараһығыҙ. (мәктәп) Әлиә лә мәктәпкә бара, ул, уҡыйым, (карточка күрһәтергә), яҙам, ти. Мәктәптә уҡытыусы уҡыта, белем бирә. Әлиә үҙе менән китап, дәфтәр, ҡәләм, ҡағыҙ алам, ти. Дуҫтар менән һөйләшәм, аралашам, ти. Мәктәптә уҡыһаң, аҡыллы булаһың (карточкалар, һүрәттәр күрһәтеү, аңлатыу эше).

**(Һүҙҙәр: кеше, бала, күрше, тәҙрә, ишек, иҙән, баҫҡыс, балаҫ, өҫтәл, ултырғыс, көҙгө, тәмле, аш, ашай, бешерә, шәкәр, сәй, һауыт, ҡалаҡ, һыу, әсе, икмәк, еҫ, уйнай, уйынсыҡ, ҡурсаҡ, аҡыл, һөйләшә, китап, дәфтәр, ҡәләм, ҡағыҙ, уҡытыусы, яҙа, уҡый).**

**Тәрбиәсе:** Әйҙәгеҙ инде йыл, миҙгелдәр, һауа торошо тураһында һөйләшәйек. «Йыл» нимә ул? (аңлатырға), бер йылда дүрт миҙгел бар, кем әйтә? (ҡыш, яҙ, йәй, көҙ). Ҡыш һыуыҡ була, ҡар яуа һәм буран була. Яҙ ҡар ирей, ағастарҙа япраҡтар ярыла, йәй инде эҫе була, ямғыр яуа, ямғыр яуғас, һауала йәйғор сыға. Көҙ көндәр һалҡыная, ямғыр яуһа, һауаны болот ҡаплай, көслө ел сыға. (карточкалар, һүрәттәр күрһәтеп, аңлатыу эше).

**(Һүҙҙәр: йыл, миҙгел, һауа торошо, ҡыш, яҙ, йәй, көҙ, ҡар, буран, ел, ямғыр, эҫе, болот, йәйғор, һыуыҡ, япраҡ).**

**Тәрбиәсе:** Миңә бала саҡта, ҡыш буран сыҡһа, әсәйем әйтә торғайны:

Тышта буран

Мин өйҙә торам
Тәҙрә аша
Тик ауыҙ йырам

**Тәрбиәсе:** Балалар, ҡояшты ҡасан күрәбеҙ? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, көндөҙ, ә төнөн күктә ай күренә. Һеҙҙе балалар баҡсаһына ҡасан киләһегеҙ? Иртәнсәк, ҡояш күренгәс. Көндөҙ беҙ урамға уйнарға сығабыҙ, һуңынан төшөкө аш һәм көндөҙгө йоҡо. Ата-әсәйҙәрегеҙ һеҙҙе кис килеп ала, ә төнөн беҙ йоҡлайбыҙ, һин йоҡлайһың, мин йоҡлайым, бөтә кеше йоҡлай.

**(Һүҙҙәр: ҡояш, төн, көн, ай, иртәнсәк, кис, урам, йоҡлай).**

**Тәрбиәсе:** Беҙҙең тыуған еребеҙ Башҡортостан матур тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан. Ер - ул киң төшөнсә. Беҙ атлап йөрөгән ер ҡатламы - ер тип атала, шулай уҡ ер -тупраҡ була. Тупраҡҡа сәскәләр, йәшелсә-емештәр ултыртабыҙ. Тәбиғәт - ул тауҙар, урмандар. Тыуған еребеҙҙең тәбиғәте ниндәй? Беҙҙең тәбиғәт матур, ҡуйы урмандары бар. Урманда ағастар, сәскәләр, үләндәр үҫә. Үлән йәшел төҫтә була. Йылғалар сылтырап аға. Бейек һәм тәпәш тауҙар бар, тауҙарҙа төрлө-төрлө таштар бар. Ә йәнлек - хайуандарҙың, ҡоштарҙың күплеге! Кем ниндәй ҡош белә? (яуаптар).

**(Һүҙҙәр: тәбиғәт, урман, үлән, йылға, таш, тау, ағас, ер, ҡош, матур, сәскә, тупраҡ, оса).** (карточкалар менән эш итеү, аңлатыу).

**Тәрбиәсе:** Балалар, әйҙәгеҙ уйын уйнап алайыҡ һәм һүҙҙәр өйрәнәйек. «Ултырам», «торам», «һикерәм», «йылмаям», «көләм», «ҡарайым» һүҙҙәре менән таныштырыу (карточкалар менән эш итеү, аңлатыу).

- Балалар, һеҙ нимә эшләйһегеҙ?(балаларҙың яуаптары).

- Мин һеҙгә һүрәттәр күрһәтәм, ә һеҙ хәрәкәттәр эшләйһегеҙ һәм әйтәһегеҙ. Балалар «мин торам», «мин ултырам», «мин ҡарайым», «мин йылмаям», «мин һикерәм», «мин йүгерәм».

**(Һүҙҙәр: ултыра, тора, һикерә, йылмая, көлә, ҡарай, йүгерә).**

**Тәрбиәсе:** Бик яҡшы балалар, ҡарағыҙ әле, был һүрәттә нимә төшөрөлгән? (таш). Эйе, таш. Таш ниндәй була? (яуаптар), «ҡаты» була, ҡаты һүҙенең киреһе «йомшаҡ» була, нимә йомшаҡ була (яуаптар).

Аҡ ҡына йомшаҡ ҡына,
Беҙгә ҡунаҡҡа килгән.
Ҡойроғо ҡыҫҡа ғына,
Ҡолаҡтары оҙон икән (ҡуян).

**(Һүҙҙәр: ҡаты, йомшаҡ).**

**Тәрбиәсе:** Балалар, балалар баҡсаһына барыр алдынан һеҙ иртәнсәк йоҡонан уянаһығыҙ, «мин уянам», «һин уянаһың», йоҡонан уянғас, нимә эшләйбеҙ - йыуынабыҙ, «мин йыуынам», «һин йыуынаһың» һәм кейем кейәбеҙ, «мин кейем кейәм», «һин кейем кейәһең».

**(Һүҙҙәр: уяна, йыуына, кейем, кейә).** (карточкалар, һүрәттәр күрһәтеп аңлатырға).

**Тәрбисәсе**: Беҙ осрашҡанда нимә тип өндәшәбеҙ? (яуаптар). Эйе, «һаумы», «һаумыһығыҙ». Ә бер - беребеҙ менән хушлашҡанда «һау булығыҙ» тип өндәшәбеҙ. Әйҙәгеҙ, бер берегеҙгә «һау бул» тип өндәшәйек. **(Һүҙ: һау бул).**

**Модуль буйынса өҫтәмә кәңәшмә: һүҙҙәрҙе ҡабатлауҙа, өйрәнеүҙә «Һомай» колонкаһын ҡулланырға була.**

**Дөйөм һүҙҙәр: һаумы, олатай, өләсәй, атай, әсәй, ағай, апай, һеңле, ҡусты, ғаилә, яратам, ҡыҙ, егет, бала, кеше, күрше, ҡала, өй, тәҙрә, ишек, иҙән, баҫҡыс, балаҫ, өҫтәл, ултырғыс, көҙгө, һауыт, аш, икмәк, ҡалаҡ, ашайым, бешерә, тәмле, һыу, әсе, сәй, эсәм, тоҙ, шәкәр, еҫ, уйынсыҡ, ҡурсаҡ, уйнайым, мәктәп, аҡыл, уҡытыусы, китап, дәфтәр, ҡағыҙ, ҡәләм, уҡыйым, яҙам, һөйләшәм, йыл, миҙгел, һауа торошо, ҡыш, яҙ, йәй, көҙ, һауа, һыуыҡ, эҫе, ямғыр, ҡар, яуа, йәйғор, болот, йондоҙ, ай, төн, көн, урам, ҡояш, буран, ел, тәбиғәт, урман, үлән, йылға, тау, таш, ағас, япраҡ, ер, ҡош, оса, матур, күләм, йылмаям, кейем, кейенәм, торам, ултырам, ҡарайым, йоҡлайым, уянам, йыуынам, йүгерәм, ҡаты, йомшаҡ, һау бул.**

### Телмәрҙе үҫтереү буйынса эш дәфтәре «Мин башҡортса һөйләшәм!»

**Маҡсат:** Балаларҙың телмәрен һәм лингвистик һәләттәрен үҫтереү.

**Дәрес барышы:**

Эш дәфтәрендә күнегеүҙәр үтәү, балаларға аңлатыу эшен алып барыу, ярҙам итеү.

# «Бейейек» модуле

Халыҡ бейеүҙәре донъя халыҡтарының ҙур бер ҡомартҡыһы булып тора. Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы башҡорт халыҡ бейеүҙәре менән таныштырыу бик мөһим. Башҡорт халыҡ бейеүҙәре аша балаларҙ үҙ халҡының тарихына, ғөрөф-ғәҙәттәренә, йолаларына ҡыҙыҡһыныу уяна. Шулай уҡ, балаларҙың музыкаль, рухи һәм физик яҡтан үҫешенә ҙур йоғонто яһай.

Халыҡ бейеүҙәре дөйөм кешелеклек, мәҙәни, рухи һәм әхләҡи ҡиммәттәр тәрбиәләүгә булышлыҡ итә.

### Башҡорт халыҡ бейеүҙәре

**Маҡсат:** балаларҙа рухи-әхлаҡи сифаттар, илһөйәрлек һәм халыҡ мәҙәниәтенә һөйөү тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** фотоһүрәттәр, иллюстрациялар, макеттар, башҡорт кейемендәге ҡурсаҡтар, слайдтар, бейеү көйҙәре йыйынтыҡтары.

**Дәрес барышы:**

Башҡорт халҡының «Ете ҡыҙ» бейеү көйөн ҡуйырға.

**Тәрбиәсе:** Балалар! Көй матурмы? (яуаптар). Был башҡорт халҡының «Ете ҡыҙ» бейеү көйө. Бөгөн мин һеҙгә башҡорт халҡының бейеүҙәре тураһында һөйләп үтәм.

**Тәрбиәсе:** Һәр халыҡтың үҙенең әкиәттәре, легендалары һәм риүәйәттәре бар, быларҙың барыһы ла халыҡ бейеүҙәрен сағылдыра. Башҡорт халыҡ бейеүҙәре сәнғәттең популяр төрҙәре иҫәбенә инә. Бейеү халыҡтарҙың тарихы һәм хеҙмәте менән бәйле (слайд, фотоһүрәт).

Башҡорт халыҡ бейеүҙәре - тарихыбыҙҙы онотмау, ата-бабаларыбыҙҙы, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе ихтирам итеү ул. Бейеү халҡыбыҙҙың көсөн, тәрән аҡылын, матурлығын быуындан быуынға тапшырып килә.

**Тәрбиәсе:** Афарин! Бейеү, ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәр төрөнә бүленә. Ҡатын-ҡыҙҙар бейеүҙәре тыйнаҡ, яй һәм еңел аҙым менән башҡарыла. Ҡулдар, яурындар хәрәкәттәренә ҙур әһәмиәт бирелә. («Ете ҡыҙ» бейеүен, видеонан өҙөк күрһәтергә).

Ир-егеттәрҙең бейеүҙәрендә башҡорт халҡының йолалары, йәшәйеше сағылған. Улар ирекле, иркен һәм дәртле башҡарыла. («Төньяҡ амурҙары» бейеүен, видеонан өҙөк күрһәтергә).

**Тәрбиәсе:** Балалар, әйҙәгеҙ, башҡорт милли кейемдәрен ҡарап үтәйек. (Башҡорт кейемендә ҡурсаҡтарҙы күрһәтеү, балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Ҡатын-ҡыҙҙарҙың милли башҡорт костюмдары сағыу, бөхтә. Уларҙың күлдәктәре оҙон еңле, оҙон итәкле, камзулдар тәңкәләр менән биҙәлгән. Ир-егеттәр кейемдәре киң салбар һәм күлдәк, өҫтөнән камзул йә елән кейәләр.

Милли кейемдәр ҡатын-ҡыҙҙарҙың нескәлеген, матурлығын сағылдырһа, ир-егеттәр кейемдәре аша уларҙың батырлғы, ҡыйыулығы, ғаиләһен һәм халҡын һаҡлаусы икәнен күрергә мөмкин.

**Тәрбиәсе:** Балалар, әйтегеҙ әле, ниндәй милли башҡорт байрамдарын беләһегеҙ? (балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, был байрамдарҙы «Ҡара тауыҡ», «Азамат», «Байыҡ» кеүек бейеүҙәр биҙәй.

**Тәрбиәсе**: Ә ниндәй башҡорт милли музыка ҡоралдарын беләһегеҙ? (балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Афариндар! Эйе, бейеүҙәр төрлө музыка ҡоралдары башҡарыуында ҡуйыла.

Башҡорт халҡы үҙҙәренең ижади мираҫына бик һаҡсыл һәм ихтирам менән ҡарай. Хәҙерге Башҡортостанда халыҡ ижады киң үҫешә. Балалар өсөн башҡорт халыҡ бейеүҙәрен заман һәм дәүер төпкөлөндә формалашҡан ҡомартҡы, бай мираҫ тип таныу бик мөһим.

**Тәрбиәсе:** Беҙҙең ҡалабыҙҙа һәм республикабыҙҙа бөтөн донъяға танылған төрлө бейеү ансамблдәре эшләп килә. Мәҫәлән,Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле, «Мираҫ» йыр һәм бейеү ансамбле һ.б. (Бейеү видеояҙмаларын ҡарау).

## Башҡорт халыҡ бейеүҙәрен ҡуйыу

**Маҡсат:** балаларҙа рухи мираҫҡа һәм милли хореография сәнғәтенә һөйөү тәрбиәләү.

**Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн хореография түңәрәгенең бурыстары:**

- Балаларға башҡорт милли халыҡ бейеүен өйрәтеү.

- Музыка тыңлау оҫталығын тәрбиәләү, уның кәйефен, характерын аңлау, бейеүҙә һынап ҡарау.

-Аяҡтарҙы, башты һәм ҡулдарҙы дөрөҫ ҡуйыуҙы булдырыу.

- Балаларҙың коммуникатив һәләттәрен, әүҙемлеген һәм үҙ-аллылығын үҫтереү.

- Репетициялар һәм сығыштарҙан ыңғай тәьҫораттар алыу.

- Бала шәхесенең дөйөм мәҙәниәтен һәм балалар менән өлкәндәр араһында әхлаҡи-эстетик мөнәсәбәттәрҙе булдырыу.

**Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн бейеүҙәр ҡуйыу буйынса түбәндәге кәңәштәр.**

- Һәр бейеү хис-тойғоларға бай, үҙенсәлекле колориты булырға тейеш.

- Бейеүҙәр балаларға уңайлы булырға, уларҙың техник мөмкинлектәренә яуап бирергә тейеш.

- Балалар бейеүе иғтибарлы, компактлы булырға тейеш.

- Балалар өсөн бейеүҙең аныҡ хәрәкәте булырға тейеш. Балалар бейеүе репертуарының төрлөлөгө (йөкмәткеһе, кәйефе буйынса) мөһим.

**Башҡорт халыҡ бейеүҙәре, тарихы, бейеү ансамбльдәре тураһында мәғлүмәт алыу өсөн «Һомай» колонкаһын ҡулланырға була.**

# «Полиглот» модуле

Балалар баҡсаһында полилингваль белем биреү һуңғы йылдарҙа әүҙем үҫешә. Ул кескәйҙәрҙең бөтә психик функцияларын формалаштыра һәм үҫтерә: ихтыяр, хәтер, күҙ алдына килтереү, иғтибар, фекерләү.

Ике һәм унан да күберәк телдә белем биреү мөхите балаларҙың коммуникатив һәләттәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә.

### Донъя халыҡтары мәҙәниәте

Бөтөн донъяла - милләттәр, халыҡтар этник төркөмдәр йәшәй. Рәсәй территорияһында ғына улар өс йөҙҙән ашыу.

Донъя халыҡтарының үҙ йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре бар, һәр милләт тел һәм мәҙәниәт берҙәмлеге менән айырылып тора. Халыҡ йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре боронғо замандарҙан уҡ башлана, быуындан быуынға күсеп килә.

Балаларҙың донъя халыҡтары мәҙәниәте менән танышыуы донъяға толерантлы ҡараш булдырыу проблемаһы сиктәрендә көнүҙәк тема булып тора, төрлө халыҡтарҙың мәҙәниәтенә ихтирам тәрбиәләй.

Мәктәпкәсә балаларҙы башҡа милләт халыҡтары менән таныштырыу саралары - әҙәбиәт, сәнғәт һәм фольклор булып тора.

### Донъя халыҡтары мәҙәниәте танышыу

**Маҡсат:** милли ғөрөф-ғәҙәттәрҙең төрлөлөгө тураһында төшөнсә, башҡа халыҡтарға, уларҙың йолаларына ихтирам тойғоһон булдырыу. Төрлө милләт кешеләренә толерантлы мөнәсәбәт тәрбиәләү.

**Дәрес барышы:**

**Тәрбиәсе:** Балалар, беҙ бөгөн һеҙҙең менән икенсе илдәргә сәйәхәт ҡылабыҙ.

### Ҡытай

**Тәрбиәсе:** nǐ hǎo — Нихао! Кем белә, ниндәй телдә өндәштем һеҙгә? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Нихао – был ҡытай телендә һаулыҡ һорашыу була, һаумыһығыҙ.

**Тәрбиәсе:** Бөгөн беҙ һеҙҙең менән Ҡытай иленә, йолаларға бай илгә барабыҙ. (слайд, һүрәттәр күрһәтергә).

**Тәрбиәсе:** Ҡытай теле иероглифтарҙан тора (слайд).

**Тәрбиәсе:** Донъялағы иң боронғо илдәрҙең береһе - Ҡытай. Уның тарихы биш мең йылдан ашыу. Ҡытайҙа ҡағыҙ, дары, фарфор, компас уйлап тапҡандар. (һүрәттәр, слайд күрһәтергә).

**Тәрбиәсе:** Ҡытайҙың баш ҡалаһы – Пекин. (слайд).

**Тәрбиәсе:** Флагы - биш йондоҙ төшөрөлгән ҡыҙыл төҫтә (һүрәт, слайд).

**Тәрбиәсе:** Дәүләт гербы - илдең төп майҙаны Тяньаньмэнь һәм уның өҫтөндә биш йондоҙ - башаҡтар менән уратып алынған трибунаны кәүҙәләндерә (һүрәт, слайд).

**Тәрбиәсе:** Уларҙың халыҡ һаны - 1,4 миллиардтан ашыу.

**Тәрбиәсе:** Ҡытайҙа иң күренекле урын - 8 мең саҡрымға һуҙылған Бөйөк ҡытай диуары. Был донъялағы иң ҙур яһалма ҡоролма. Ул хатта Космостан да яҡшы күренә (һүрәт, слайд).

**Тәрбиәсе:** Ҡытай халҡы өсөн иң ҙур байрам – ул Яңы йыл байрамы. Улар өсөн яңы йыл – йыл башы, тәбиғәттең, тормоштоң уяныуын аңлата. Һәр йыл өсөн билдәле бер төҫ һәм 12 хайуандың береһе тура килә.

**Тәрбиәсе:** Ҡытай халҡының милли кейеме Ханьфу тип атала (слайд). Ханьфу оҙон күлдәк бер нисә кейем ҡатламынан тора. Ғәҙәттә, кейем ирекле,

киң еңле.

Ғәҙәттәгесә, Ханьфу ебәктән тегелгән, был етешлекте һәм статусты аңлата. (слайд).

**Тәрбиәсе:** Һәр бер халыҡтың үҙ музыка ҡоралы бар. Кем әйтә, ниндәй башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарын беләһегеҙ?

**Тәрбиәсе:** Бик яҡшы, ҡытай халҡының музыка ҡоралдары менән танышайыҡ. Айсяо - бер-береһенә беркетелгән бамбук көпшәләрҙән торған боронғо тынлы музыка ҡоралы. Был флейтаны йыш ҡына Боронғо ҡытай оркестрында ҡулланғандар. Ул йомшаҡ һәм тыныс яңғыраш ала. Соя йәки дунсяо - ул ябыҡ аҫҡы яғы менән традицион ҡытай бамбук флейтаһы. Был музыка ҡоралының тарихы әлегә билдәле түгел, әммә уның ете мең йыл элек барлыҡҡа килгән боронғо музыка ҡоралдарының береһе булыуы мөмкин, тигән фараз бар.

Бяньцин - ул ҡытайҙарҙың һуҡма ҡоралы, ул ағас рамға эленгән Г рәүешендәге яҫы ҡыңғырауҙарҙан тора. Улар йә сүкеш, йә булмаһа осонда шар торған таяҡ менән һуғалар. (слайд, көй менән аудиояҙмалар ебәрергә була).

**Тәрбиәсе:** Балалар, беҙҙең Ҡытай иленә сәйәхәт тамам, һеҙгә - Цзайцзиень! Ҡытай телендә Һау булығыҙ тигәнде аңлата.

Йомғаҡ яһау, фекер алышыу.

## Һиндостан

**Тәрбиәсе:** Намасте! Ә был ниндәй телдә өндәштем һеҙгә? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Һинд телендә һеҙҙең менән һаулыҡ һораштым, намасте – һаумыһығыҙ! Әйҙәгеҙ, бер – берегеҙ менән һинд телендә һаулыҡ һорашығыҙ. Намасте !

**Тәрбиәсе:** Афарин, бөгөн беҙҙең сәйәхәт Һиндостанға. (слайд).

**Тәрбиәсе:** Һиндостан – бейек, ҙур Гималайҙар тауы, данлыҡлы Ганг йылғаһы эргәһендә урынлашҡан ил. (слайд, һүрәттәр).

Һиндостандың баш ҡалаһы – Нью-Дели.

Уларҙың халыҡ һаны - 1,4 миллиардтан ашыу.

Гербы - 4 арыҫлан төшөрөлгән, 4-се арыҫлан артта, күренмәй, арыҫландар аҫтында 4 яҡҡа ҡараған йәнлектәр төшөрөлгән – арыҫлан - төнъяҡ, фил - көнсығыш, үгеҙ - көнъяҡ, ат - көнбайыш, һүрәттә үгеҙ менән ат ҡына күренә. Лотос сәскәһе йәшәү сығанағын аңлата.

Һиндостан флагы - тигеҙ киңлектәге өс горизонталь һыҙаттан торған тура мөйөшлө туҡыманан тора. Флагтың уртаһында ҡуйы зәңгәр төҫтәге тәгәрмәс һүрәте төшөрөлгән. Флагтың ҡыҙғылт-һары төҫө - рухилыҡты, аҡ - тыныслыҡты, йәшел - уңдырышлылыҡты, ә түңәрәк дини символды аңлата.

Һиндостандың иң билдәле урыны һәм ете яңы донъя мөғжизәһенең береһе - Таж-Махал. Был мәсет Һиндостандың Агра ҡалаһында урынлашҡан. (слайд).

Һинд халҡының байрамдары: Вайсакхи - уңыш фестивале. Ул 12 апрелдән 14-нә тиклем үткәрелә һәм яңы йылдың башын символлаштыра. Байрам иртә таңдан, ҡояш сыҡҡансы уҡ башлана. Улар ғибәҙәтханаларға сәскәләр һала, бынан һуң йылғала тәһәрәт алалар. Байрам ризығы - кара прашад, ул хәлүәнең бер төрө. (слайд, һүрәттәр).

Көн буйы байрам дауам итә, халыҡ милли кейем кейеп урам буйлап байрам итәләр.

**Тәрбиәсе:** Кем белә һинд халҡының милли кейемен? (яуаптар). Бик яҡшы.

**Ир-егеттәр кейеме:**

Дхоти - туҡыманың оҙон туҡыманан тора, ул янбаштан әйләнә, ә уның бер осо, үҙенсәлекле ҡыҫҡа салбар һымаҡ, аяҡтары араһынан үтә.

Курта - һиндтарҙың тубыҡҡа тиклем оҙон традицион күлдәге.

Шервани - тубыҡтан түбәнерәк айырым сюртук.

Чуридаралар - үҙенсәлекле тегелгән тар ыштандар, уны шервани менән кейәләр. (слайдттар).

**Ҡатын-ҡыҙҙар кейеме:**

Сари - оҙон туҡыманан тора, уны һинд ҡатын-ҡыҙҙары матур силуэт яһап урайҙар.

Сиҙәм сальвары - оҙон туника киң салбарҙан торған комплект. (слайдттар).

Тәрбиәсе: Һинд халҡының музыка ҡоралдары:

Табла- ике барабан, унда һәр ваҡыт парлы уйнайҙар. Унда ҡул устары менән, йә бармаҡ остары менән һуғып уйнайҙар.

Ситара – ҡыллы музыка ҡоралы.

Бансури – бамбук ағасынан эшләнгән флейта, 7-9 тишек тишелә. (слайдттар, (көй менән аудиояҙма ебәрергә була)).

**Тәрбиәсе:** Афарин, Һиндостан буйлап сәйәхәтебеҙ тамам. Намасте (намаскар)! Алвида! Һинд телендә һау буллашыу.

Йомғаҡ яһау, фекер алышыу.

## Үзбәкстан

**Тәрбиәсе:** Беҙҙең сит илдәр буйлап сәйәхәтебеҙ дауам итә. Салом болалар! Үзбәк телендә «һаумыһыҙ, балалар» тип өндәштем һеҙгә.

**Тәрбиәсе:** Үзбәкстан - легендар Ебәк юлының ынйыһы. Боронғо архитектура ҡомартҡылары, мең йыллыҡ рецепттар буйынса үзбәк былауы, бейек тауҙар һәм зәңгәр күлдәр, шулай уҡ бер ни менән дә сағыштырғыһыҙ көнсығыш ҡунаҡсыллығы - былар барыһы ла һеҙҙе Үзбәкстанда көтә (слайд).

Үзбәкстандың баш ҡалаһы – Ташкент.

Уларҙың халыҡ һаны – 37 миллиондан ашыу.

Үзбәкстан флагы - флагтың бөтә оҙонлоғондағы күк, аҡ һәм йәшел төҫтәге өс горизонталь һыҙаттан торған тура мөйөшлө туҡыма. Флагтағы күк-зәңгәр төҫ - зәңгәр күктең һәм таҙа һыуҙың символы. Аҡ төҫ - таҙалыҡ һәм тыныслыҡ билдәһе. Йәшел төҫ - илдең күркәм тәбиғәте, ҡыҙыл һыҙаттар - йәшәү көсөн аңлата. Ярым ай һәм йондоҙҙар - болотһоҙ донъя һәм күк символы (слайд).

Гербта тау, йылға һәм үҙән өҫтөнә нурҙары төшкән алтын төҫөндәге ҡалҡып килгән ҡояш һүрәте Ул уң яҡта - бойҙай башаҡтарынан һәм һулда - мамыҡ ҡумталары асыҡ булған кизе-мамыҡ ботаҡтарынан тора (слайд).

Илдең күренекле урыны - Регистан - Тамерлан идара иткән осорҙан алып Сәмәрҡәндтең хәрби майҙаны. Был урын илдең иң матур майҙаны, «ҡом ҡаплаған урын» йәки «ташландыҡ ер» тип тәржемә ителә (слайд).

**Тәрбиәсе:** Балалар, кем ниндәй байрамдар белә? Үзбәк халҡының байрамы – Науруз. Йыл һайын 21 мартта яҙ килеүен һәм астрономик календарь буйынса Яңы йылды ҡаршылайҙар. Азияның күп илдәрендә Науруз - дәүләт байрамы. Йола буйынса был көндө кешеләр ҡунаҡҡа йөрөй, бер-береһен ҡотлай, һый-ниғмәт әҙерләй. Наурузды ни тиклем йомартыраҡ һәм күңеллерәк ҡаршы алһаң, киләһе йыл да шул тиклем уңышлыраҡ буласаҡ, тип иҫәпләнә (слайд).

**Тәрбиәсе:** Үзбәк халҡының милли кейеме:

Ир-егеттәр кейеме: Чапан – һырылған хала, кийикча - билдек менән бәйләнә.

Куйлак – тура, киң тегелгән күлдәк.

Иштон – киң ыштан. Баш кейеме – түбәтәй. (слайдттар).

Ҡатын-ҡыҙҙар кейеме: оҙонлоғо тубыҡ аҫтына тиклем күлдәк, аҫтына киң ыштан кейәләр. Баш кейемедәре түбәтәй, яулыҡ, тюрбандан тора. (слайдттар).

**Тәрбиәсе:**

Дойра - һуҡма дөңгөргә оҡшаған музыка ҡоралы.

Нагора – ул һуҡма музыка ҡоралы, ул күн менән көпләнгән керамик көршәккә оҡшаған.

Най – флейта, бамбук ағасынан эшләнә, 6 тишек тишелә. (слайдттар, (аудиояҙма ебәрергә була).

**Тәрбиәсе:** Үзбәкстан иле буйынса сәйәхәт тамам. Хайр! Һау булығыҙ!

Йомғаҡ яһау, фекер алышыу.

## Башҡорт теле. Башҡорт телен өйрәнгәндә бояуҙы ҡулланыу

Бояуҙы башҡорт телен өйрәнеү һәм нығытыу өсөн файҙаланырға мөмкин. Бояу ярҙамында, балалар, үҙҙәренең сәнғәт һәләттәрен үҫтереүҙән тыш, башҡорт һүҙҙәре һәм фразаларын иҫтә ҡалдырыуҙы ла яҡшырта ала.

Уҡытыуҙа бояуҙы ҡулланыуҙың өҫтөнлөктәренең береһе - баланың логик һәм ижади яҡтары әүҙем эшләй.

Бояу визуаль ҡабул итеүҙе һәм үҙенсәлекте үҫтерә, шулай уҡ балаларға тел структураларын һәм лексиканы яҡшыраҡ үҙләштерергә мөмкинлек бирә.

**Тематик бояуҙар.**

- Алфавитты өйрәнеү өсөн. Хәрефтең исеме ошо хәрефкә башланған предмет төшөрөлгән һүрәт менән ассоциациялы хәтерҙә ҡалдырырға ярҙам итә. Бала һүрәтте ҡарай, хәрефте хәтерендә ҡалдыра.
- Һандарҙы хәтерҙә ҡалдырыр өсөн. Бында эштең төрлө варианттары бар. Мәҫәлән, бөтә «бер» һандарын ҡыҙыл төҫ менән бояу.
- геометрик фигуралар өйрәнеү өсөн: мәҫәлән, өсмөйөш, шаҡмаҡ.

**Һандарға карап бояу.**

Балаларға һандарҙы, төҫтәрҙе хәтергә төшөрөргә, һүҙҙе уҡырға өйрәтергә, уларҙың әһәмиәтен ҡабатларға мөмкинлек бирә. Мәҫәлән, 1-се йәшел төҫ, 2-се ҡыҙыл төҫ.

**Предметтарҙы табып бояу.**

Кәрәкле предметтарҙы табып, буярға. Мәҫәлән, ағасты тап, ағас япраҡтары ниндәй төҫтә була?

**Маҡсат:** Башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу, яңы һүҙҙәр хәтерҙә ҡалдырыу.

**Йыһазландырыу:** Буяуҙар, төҫлө ҡәләмдәр.

**Эш:** Тематик буяуҙарҙы һайлап дәрес үткәрергә (хәрефтәр, төҫтәр өйрәнеү, һандарҙы хәтерҙә ҡалдырыу өсөн һ.б).

### Башҡорт теле

**Йыһазландырыу:** Интерактив панель, ҡурсаҡ.

**Дәрес барышы.**

Донъя халыҡтары мәҙәниәте. Балалар. Бөгөн беҙгә ҡунаҡҡа Айһылыу килгән, Айһылыу беҙгә башҡорт теленән дәрес үткәрә. Әйҙәгеҙ Айһылыуҙы сәләмләйек. (Һаумы, Айһылыу).

Интерактив панельдә, лексика бүлеген асырға.




Беренсе битендә ғаилә темаһы, башҡорт телендә ғаилә ағзалары нисек аталыуын өйрәнеү.

Икенсе битендә уйынсыҡтар башҡорт телендә нисек аталыуын өйрәнеү.

Өсөнсө битендә йәнлектәр, ҡоштар – ҙур, бәләкәй.

Балалар менән ҡабатларға, үткән һүҙҙәрҙе нығытып ҡуйырға.

**Тәрбиәсе:** Беҙҙең дәресебеҙ тамам. Һау булығыҙ, Айһылыу менән дә хушлашайыҡ. (Һау бул, Айһылыу).

### Организация занятий на иностранном языке

**Английский язык.**

**Урок 1**

**Цель:** Формирование интереса к учению, к познанию окружающего мира, людей, отношений и культур на основе овладения иноязычной речью.

**Материал:** Интерактивная панель, кукла

**Ход занятия**

**Воспитатель:** Hello, Kids! Здравствуйте, дети! Һаумыһығыҙ балалар! (ответы).

**Воспитатель:** Сегодня к нам пришла в гости кукла Элен. Она нам проведет урок, как будет семья и члены семьи на английском языке. Вы готовы? (ответы).

Включить интерактивную панель (английский язык, семья англ.).




Обучающая игра для детей, позволяющая выучить названия всех членов семьи, уметь различать их на слух, читать. Дети с легкостью запомнят правильное произношение изучаемых слов.

В конце занятия повторить изученные слова, закрепить.

**Воспитатель:** А теперь наше занятие подошло к концу, Элен говорит нам до свидания! Goodbye!

**Урок 2**

**Материал:** Интерактивная панель, кукла

**Ход занятия.**

**Воспитатель:** Hello, Kids! Здравствуйте, дети! Һаумыһығыҙ балалар! (ответы).

**Воспитатель:** И сегодня к нам пришла в гости кукла Элен. Она нам расскажет, как будут цвета на английском языке. Вы готовы? (ответы).

Включить интерактивную панель (английский язык, цвета англ.).




Обучающая игра для детей, позволит узнать и запомнить цвета на английском язык. Игра Цвета, развивает навыки аудирования.

В конце занятия повторить изученные слова, закрепить.

**Воспитатель:** А теперь наше занятие подошло к концу, Элен говорит нам до свидания! Goodbye!

**Урок 3**

**Материал:** Интерактивная панель, кукла

**Ход занятия**

**Воспитатель:** Hello, Kids! Здравствуйте, дети! Һаумыһығыҙ балалар! (ответы).

**Воспитатель:** Поздороваемся с куклой Элен. Hello, Elen! Сегодня мы с ней выучим названия чисел на английском языке от 1 до 10. Вы готовы? (ответы).

Включить интерактивную панель (английский язык, числа англ.).

Обучающая игра для детей, позволит узнать и запомнить названия чисел на английском язык.

В конце занятия повторить изученные слова, закрепить.

**Воспитатель:** А теперь наше занятие подошло к концу, Элен говорит нам до свидания! Goodbye!

**Урок 4**

**Материал:** Интерактивная панель, кукла

**Ход занятия**

**Воспитатель:** Hello, Kids! Здравствуйте, дети! Һаумыһығыҙ балалар! (ответы).

**Воспитатель:** Поздороваемся с куклой Элен. Hello, Elen! Сегодня она нас познакомит с окружаюим миром. Вы готовы? (ответы).

Включить интерактивную панель (английский язык).




В конце занятия повторить изученные слова, закрепить.

**Воспитатель:** А теперь наше занятие подошло к концу, Элен говорит нам до свидания! Goodbye!

# «Атайсал» модуле

Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙа Ватанға ҡыҙыҡһыныу тыуа, илһөйәрлек тойғоһо формалаша башлай. Шуға күрә ата-әсәләр һәм тәрбиәселәр балаларға маҡсатлы рәүештә тәьҫир итергә, уларҙы тыуған еренең мәҙәниәте һәм тарихы менән таныштырырға, халыҡ йолаларына ҡыҙыҡһыныу уятырға, тыуған яҡ тәбиғәтенә һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләргә тейеш.

Балаларҙы тыуған яҡ менән таныштырғанда баланың тыуған иле, тарихы, йолалары, күренекле урындары, һәйкәлдәре, күренекле шәхестәре менән нисек дан тотоуын күрһәтергә кәрәк.

Башҡортостан Республикаһына килгәндә, тәрбиәсенең төп бурыстарының береһе - балаларҙы милли мәҙәниәт, унын традициялары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштырыу. Уларҙың нигеҙендә Башҡортостан, Рәсәй халыҡтары мәҙәниәтенә ихтирамлы мөнәсәбәт ята.

Башҡортостан Республикаһы күп милләтле. Башҡорттар - төп халыҡ, шуға күрә белем биреү процесы башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәте менән берҙәмлектә төҙөлөргә тейеш.

Балалар өсөн милли-төбәк компоненты уҡытыу-тәрбиә эшендә иң мөһим урынды алып тора. Кескәйҙәрҙе республикабыҙҙың тәбиғәте, тарихы, халыҡ ижады менән таныштырыу зарур. Был баланың милли үҙаңын уятыуға, башҡа милләттәргә ҡарата ихтирам тойғоһон тәрбиәләүгә булышлыҡ итә.

## Тыуған ерем – Рәсәй.

**Маҡсат:** Рәсәй һәм уның баш ҡалаһы тураһында белем биреү; Рәсәй символикалары менән таныштырыу.

**Йыһазландырыу:** слайдттар, фотоһүрәттәр, иллюстрациялар.

**Дәрес барышы:**

**Тәрбиәсе:** Балалар, бөгөн беҙ ҙур тыуған илебеҙ тураһында һөйләшәсәкбеҙ.

**Тәрбиәсе:** "Ватан нимә ул?" (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** беҙ ниндәй илдә йәшәйбеҙ? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, Рәсәй.

**Тәрбиәсе:** Рәсәй тураһында факттар.

Рәсәй – 18 ил менән сиктәш.

Рәсәй – донъяла 12 диңгеҙ менән йыуылған берҙән-бер ил.

Рәсәй – күп милләтле ил.

Рәсәй республикаларҙан, өлкәләрҙән, крайҙарҙан тора.

Рәсәйҙең баш ҡалаһы - Мәскәү.

**Тәрбиәсе:** Һәр илдең үҙенең символикаһы, гербы, флагы, гимны бар. Илебеҙҙең символикалары менән таныштырып үтәм.

Герб һәм флаг-Рәсәйҙең дәүләт символдары..

Гимн - ул барлыҡ дәүләт байрамдарында, сараларында, спорт ярыштарында башҡарылған тантаналы йыр. Гимнды баҫып тыңлайҙар. Ошо рәүешле беҙ дәүләтебеҙгә, илебеҙгә ихтирамыбыҙҙы белдерәбеҙ. С. В. Михалков – Рәсәй гимнының авторы.

**Тәрбиәсе:** Рәсәй Федерацияһының гербы дүрт мөйөшлө ҡалҡандан тора, ике башлы алтын бөркөт төшөрөлгән. Бөркөт күкрәгендә, ҡыҙыл ҡалҡанда - көмөш ат өҫтөндәге көмөш һыбайлы. Ул ҡара йыланды көмөш һөңгөһө менән үтә тишә.

Рәсәй флагы – өс горизонталь һыҙаттарҙан тора: өҫкөһө – аҡ, урталағыһы – күк аҫтағыһы – ҡыҙыл төҫтә.

- Аҡ төҫ тыныслыҡты, асыҡлыҡты аңлата;
- Зәңгәр төҫ – иман, тоғролоҡ, даимилыҡ һәм намыҫлылыҡ төҫө;
- Ҡыҙыл төҫ энергияны, көс-ҡеүәтте, батырлыҡты, мөхәббәтте символлаштыра.

## Атайсал – Башҡортостан.
## Башҡортостан Республикаһы.

**Маҡсат:** Башҡортостан Республикаһы тураһында балаларҙың белемен киңәйтеү.

**Йыһазландырыу:** слайд, фотоһүрәттәр, иллюстрациялар, Башҡортостан Республикаһы тураһында шиғырҙар.

**Дәрес барышы:**

**Тәрбиәсе:** Балалар, бөгөн беҙ республикабыҙ буйлап сәйәхәт итәсәкбеҙ. Республикабыҙҙың исемен кем әйтер? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, Башҡортостан. Һәр кешенең йөрәге өсөн айырыуса ҡәҙерле урындары бар, ул тәүге аҙымдарын яһаған, тормошондағы иң тәүге һүҙҙәрҙе әйткән, уның туғандары, иң яҡындары йәшәшгән ер – Атайсал тип атала. Башҡортостан Республикаһы беҙҙең өсөн шундай урын булып тора (карта).

**Тәрбиәсе:** Республикабыҙҙың исемен ҡайҙан килеп сыҡҡанын, кем белә, кем әйтә ала? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Ике вариант бар. Беренсе вариант: республика исеме төп халыҡ исеменән алынған. Башҡорттар үҙҙәрен башҡорт тип атай: «баш», «төп» һәм «ҡорт» – «бүре». Төрки халыҡтары бүрене үҙҙәренең боронғо ата-бабаһы тип иҫәпләгән. Икенсе вариант: «баш» – «баш, төп» һәм «ҡорт» – «бал ҡорто».

Башҡорт теле төрки тел төркөмөнә ҡарай, башҡорттар урта быуаттар һәм хәҙерге осорҙо үҙ эсенә алған бай тарихҡа эйә. Тарихи йәһәттән Башҡортостан Алтын Урҙа, Өфө ханлығы һәм Рәсәй империяһының бер өлөшө булды.

XX быуат аҙағында Башҡортостан рәсми рәүештә Рәсәйҙең бер өлөшөнә әйләнде.

**Тәрбиәсе:** Ә беҙ һеҙҙең менән республикабыҙ тураһында белем алыуҙы дауам итәбеҙ.

Республика тураһында факттар.

- Парламент – Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай.
- Республикала халыҡ һаны – 4 миллиондан ашыу.
- Баш ҡалаһы – Өфө.
- Тел – башҡорт теле, урыҫ теле.
- Республика территорияһында: 21 ҡала.
- Районда р – 54.
- Нефть компанияһы – Башнефть.
- Хоккей клубы – Салауат Юлаев.

## Башҡортостандың географияһы һәм тәбиғәте

**Тәрбиәсе:** Бөгөн беҙ һеҙҙең менән Башҡортостандың тәбиғәтен, географияһы, күренекле урындары менән танышабыҙ.

**Тәрбиәсе:** Башҡортостан Республикаһы Көньяҡ Урал битләүҙәрендә, Урал алдында һәм Урал аръяғында урынлашҡан.

Иң бейек нөктә - Ямантау (1640 метр). Бейеклеге буйынса икенсе урында - Ирәмәл тауы (1582 м).

Бында 12 000-дән ашыу йылға аға, 2700-гә яҡын күл, быуа һәм һыу яткылыктары урынлашҡан.

Иң ҙур күл – Асылыкүл .

Урмандар республиканың 40 процент майҙанын биләй.

Иң ҙур йылға - Ағиҙел.

Башҡорт халҡының геройы - Салауат Юлаев.

Тәбиғәте һәм боронғо ҡаяға төшөрөлгән һүрәттәре менән тарих ҡомартҡыһы - Шүлгәнташ.

Геологик ҡомартҡылар – Шихандар (Йөрәктау, Ҡуштау, Торатау).

Слайдтар күрһәткән ваҡытта балаларға аңлатырға, комментарий, һорауҙар бирергә кәрәк.

**«Башҡортостан картаһы» дидактик уйыны.**

**Маҡсат:** иғтибар, хәтерҙе үҫтереү, тыуған төйәккә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү, балаларҙы Башҡортостан Республикаһы районлары һәм ҡалалары менән таныштырыу.

**Уйын барышы:**

Пазл уйыны. Райондарҙың һәм ҡалаларҙың айырым контурҙары әҙер өлгөгә - Башҡортостан картаһына һалына. Райондарҙың атамаларын тәүҙә тәрбиәсе әйтә, һуңынан балалар ҡабатлай. Пазл картаһын йыйыр алдынан әңгәмә үткәрергә, балаларҙы Башҡортостан Республикаһы менән таныштырыу, ҡайҙа ниндәй район урынлашҡан, башҡа райондарҙан нимә менән айырыла, райондар, ҡалалар тураһында һөйләү.

**Башҡортостан Республикаһы символдары менән танышыу**

**Маҡсат:** балаларҙы Башҡортостан Республикаһы менән таныштырыуҙы дауам итеү.

**Йыһазландырыу:** слайд, фотоһүрәттәр, иллюстрациялар, аудиояҙма, туп.

**Дәрес барышы:**

**Тәрбиәсе:** Балалар, беҙ һеҙҙең менән республика буйлап сәйәхәтебеҙҙе дауам итәбеҙ. Башта уйын уйнап алайыҡ.

Балалар, хәҙер мин һеҙгә һорауҙар бирәм һәм туп ырғытам, кемдең ҡулында туп була, шул яуап бирә.

- Башҡортостандың баш ҡалаһы? (Өфө)

- Республикала иң таҙа ҡала? (Стәрлетамаҡ)

- Иң ҙур күл? (Аслыкүл)

- Милли герой? (С.Юлаев)

- Иң бейек тау? (Ямантау)

**Тәрбиәсе:** Афарин! Тыуған илебеҙ буйлап сәйәхәтебеҙҙе дауам итәбеҙ, Башҡортостан Республикаһы символикаһы тураһында һөйләйем.

Башҡортостан Республикаһының флагы эмблемалы тура мөйөшлө туҡыманан тора. Горизонталь һыҙаттарҙан, күк төҫтә өҫкө һыҙат, аҡ төҫтә урта һыҙат, йәшел төҫтә аҫҡы һыҙат. Аҡ һыҙаттың уртаһында эмблема - түңәрәк төшөрөлгән, түңәрәк эсендә 7 таждан торған ҡурай сәскәһе төшөрөлгән.

Башҡортостан Республикаһы флагында:

- Зәңгәр төҫ республика халыҡтарының уй-ниәттәренең асыҡлығын һәм сафлығын аңлата;

- Аҡ төҫ халыҡтың асыҡлығын, хеҙмәттәшлеккә әҙерлеген, тыныслыҡ һөйөүен аңлата;

- Йәшел төҫ - азатлыҡ, йәшәйештең мәңгелеген аңлата;

- Ҡурай сәскәһе Башҡортостан халыҡтарының берләшеүенә һәм берләшеүенә башланғыс һалған 7 ырыуҙы символлаштыра (слайд).

Башҡортостан Республикаһының гербында милли биҙәк менән уратып алынған түңәрәк эсендә сығып килгән ҡояш һәм уның нурҙары аҫтында Салауат Юлаев һәйкәле һүрәте төшөрөлгән. Аҫта ҡурай сәскәһе, Башҡортостан Республикаһының дәүләт флагы төҫтәре, аҡ төҫөндә Башҡортостан тип яҙылған таҫма һүрәтләнгән.

**Тәрбиәсе:** Кем әйтә, кем ул Слават Юлаев? (яуаптар)

**Тәрбиәсе:** Ә һеҙ беләһегеҙме, Салауат Юлаев һәйкәле - яугир, азатлыҡ һәм ғәҙеллек өсөн көрәшсе егеттең дөйөмләштерелгән образы, ул Башҡортостан халыҡының дуҫлығын һәм берҙәмлеген символлаштыра.

**Тәрбиәсе:** Ҡурай - Башҡортостандың символы булып иҫәпләнә. Ә берәйһе ни өсөн ҡурай сәскәһе Башҡортостан символы булып тороуы хаҡында әйтә аламы? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Берҙәм башҡорт халҡының барлыҡҡа килеүенә 7 төп ырыу нигеҙ һалған. 7 ҡурай тажы - ҡурай сәскәһе – 7 ырыу араһындағы дуҫлыҡ символы (слайд). Ырыуҙар берләшмәһе иң ҙур ҡәбиләләрҙән торған: бөрйән, үҫәргән, түңгәүер, ҡыпсаҡ, ҡатай, мең, табын. Ысын барлыҡта ырыуҙар күберәк (45 тирәһе).

Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимнын композитор Фәрит Фәтих улы Иҙрисов 1990 йылдың 11 октябрендә яҙған. Гимндың музыкаһына «Урал» башҡорт халыҡ йыры темаһы ингән. Тантаналы сараларҙы асыу һәм ябыу ваҡытында башҡарыла. (Гимн тыңларға була).

**Башҡортостан Республикаһы символдары» уйыны.**

**Маҡсат:** балаларҙы Башҡортостандың дәүләт символикаһы менән таныштырыуҙы дауам итеү, тыуған төйәккә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу.

**Йыһазландырыу:** флаг, герб, ҡурай, альбом, гуашь.

**Дәрес барышы:**

**Тәрбиәсе:** Балалар. Республикабыҙ ҙур булғас, сәйәхәтебеҙҙе тыуған илебеҙ буйлап дауам итәбеҙ, ләкин сәйәхәт эштәр менән уйын формаһында булыр.

**Тәрбиәсе:** Экранда нимә күрәһегеҙ? (ҡурай) (яуаптар).

**Тәрбиәсеһе:** Афарин, балалар. Ҡурай нимәне символлаштыра? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Республика символдарын кем әйтә? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Балалар, экранға ҡарағыҙ, нимә төшөрөлгән? (Башҡортостан Республикаһының флагы).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, афарин! Флаг ниндәй төҫтә? (күк, аҡ, йәшел).

**Тәрбиәсе:** Эйе, афарин! Флаг төҫтәре нимәне аңлата? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Ә хәҙер сәйәхәтебеҙҙең һуңғы эше. Беҙ Башҡортостан Республикаһы флагын төшөрәбеҙ.

**Тәрбиәсе:** Әйҙәгеҙ, эште башлайыҡ (балалар өсөн үҙ аллы эш)

**Тәрбиәсе:** Балалар! Һеҙгә сәйәхәт оҡшанымы? Бөгөн беҙ нимә менән шөғөлләндек?

Эштәр күргәҙмәһе.

**Башҡортостан Республикаһы территорияһында йәшәүсе халыҡтар.**

**Маҡсат:** Башҡортостан Республикаһы милли составының төрлөлөгө тураһында төшөнсә булдырыу.

**Йыһазландырыу:** фотоһүрәттәр, иллюстрациялар, макеттар.

**Дәрес барышы:**

**Урыҫ халҡы**

**Тәрбиәсе:** Һаумыһығыҙ! Балалар, бөгөн беҙ һеҙҙең менән Башҡортостан Республикаһында йәшәгән халыҡтар менән танышабыҙ. Башҡортостан Республикаһында төрлө милләт кешеләре, урындағы халыҡ – башҡорттар, урыҫтар, татарҙар, сыуаштар, мариҙар, удмурттар, 100-ҙән ашыу милләт йәшәй. (фото) Һәр халыҡтың үҙ мәҙәниәте, тарихы, йолалары бар.

**Тәрбиәсе:** Бөгөн мин һеҙгә урыҫ халҡы тураһында һөйләйем.

Урыҫтар – көнсығыш славян этник төркөмөнә ҡараған халыҡ.

Милли кейемдәре: традицион кейемдең төп элементы - бер йәки бөтөн беселгән, киндер йәки етендән тегелгән, биҙәктәр менән биҙәлгән күлдәк. Сарафан ҡатын-ҡыҙ образының айырылғыһыҙ предметы булған. Ир-егеттәр күлдәк кейгән- рубаха, киң салбар. Баш кейемдәре ир-егеттәрҙең тафьи тип атала - бәләкәй генә йомро башлыҡ, ҡышҡы баш кейеме треухи тип аталған. Кейәүҙә булған ҡатын-ҡыҙҙар сәстәрен гел ҡаплап йөрөгәндәр, өйҙә яулыҡ ябынғандар, ә урамға сыҡҡанда яулыҡ өҫтөнән кокошники йә кички тип аталған баш кейеме кейгәндәр. (слайд, фотоһүрәт).

Милли ризыҡтары: аш – щи, бутҡалар, ҡоймаҡ, бәлештәр. (слайд, фотоһүрәт).

Милли байрамдары: Рождество, Яңы йыл, Крещение байрамдары.

Масленица – ҡыш менән хушлашыу һәм яҙҙы ҡаршы алыу байрамы, Бөйөк пост һәм Пасхаға әҙерлек. Аҙна буйына ҡояш символы булараҡ ҡоймаҡ бешерәләр (слайд, фотоһурәт).

## Татар халҡы

**Тәрбиәсе:** Бөгөн татар халҡы, уларҙың мәҙәниәте, йолалары тураһында һөйләшәйек.

Татарҙар – Рәсәйҙең һәм донъяның күп һанлы һәм мәҙәни яҡтан төрлө халыҡтарының береһе. Татар теле төрки тел төркөмөнә ҡарай.

Милли кейемдәре: ҡатын-ҡыҙҙарҙың күлдәге сағыу төҫтә, күбекләнеп торған күлдәк ҡырлы, өҫтөнән камзул кейгәндәр. Кейемдәре орнамент менән биҙәлгән. Ҡатын-ҡыҙҙар баш кейеме – ҡалфаҡ тип атала (слайд, фотоһурәт).

Ир-егеттәр милли кейемдәре: ир-егеттәр сигеү менән биҙәлгән күлдәк өҫтөнә халат йәки камзул кейгәндәр. Ир-егеттәрҙең баш кейеме - түбәтәй. Түбәтәйҙәр бәрхәттән тегелгән һәм сигеү менән биҙәлгән.

Милли ризыҡтары: аш-һыу һәм һурпа - аш-һыу, сәк-сәк, бауырһаҡ (слайд, фотоһүрәт).

Байрамдары: төрки сығышлы башҡа халыҡтар кеүек , татар халҡы ла Науруз байрамын билдәләй. Тәржемәлә Науруз “яңы көн” тигәнде, яҙ килеүен аңлата. Ғәҙәттә, көн менән төндөң тигеҙләшкән көнөндә, нәк 21 мартта, байрам итәлә.

Һабантуй байрамы - яҙғы баҫыу эштәренең тамамланыуын билдәләй (слайд, фотоһүрәт).

## Сыуаш халҡы

**Тәрбиәсе:** Балалар! Әйҙәгеҙ, мин һеҙгә сыуаш халҡы тураһында һөйләйем. Республикабыҙҙа уларҙың күпмеһе йәшәй, кейемдәре, мәҙәниәте тураһында.

**Тәрбиәсе:** Сыуаш халҡының атамаһының төп версияһы «суварҙар», йәки «сувaздар», боронғо ҡәбиләләре менән бәйле.

Сыуаш теле төрки телдәр төркөмөнә ҡарай һәм хәҙерге Рәсәйҙең иң боронғо телдәренең береһе булып тора.

Күпселек сыуаштар - полиглоттар, йәғни улар төрки телендә иркен аралаша ала.

Милли кейемдәре: ҡатын-ҡыҙ кейемдәре - мул итеп тегелгән кейем (кепе). Түш биҙәүестәре тәңкәләр менән тегелә. Ирҙәр костюмы киндер семәрле-ҡыйыҡ яғанан тора. Киң салбар менән итек кейгәндәр. Ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар һәр саҡ билдек менән билдәрен быуып йөрөгәндәр (слайд).

Милли ризыҡтары: иттән эшләнгән какай-шурпи – аш, хуран-кукли – билмән, йәшел һуған, эремсек йәки йомортканан бешерелә, йава (слайд).

Байрамдары: Саварни байрамы ҡыш оҙатыуға арнала. Байрам йыр-бейеүҙәр һәм уйындар менән уҙғарыла. Курак - тәүге үлән сығыу байрамы (слайд).

## Мари халҡы

**Тәрбиәсе:** Балалар, Башҡортостанда ниндәй халыҡтар йәшәй? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Афарин, Башҡортостан Республикаһында урыҫ, татар халҡы һәм мари халҡы йәшәй, бөгөн мари халҡы менән танышып үтәбеҙ.

Мари халҡы - фин-уғыр халҡы, күбеһенсә Мари Эл Республикаһында һәм Башҡортостан Республикаһының төньяғында йәшәй.

Милли кейемдәре: ҡатын-ҡыҙ кейеме - оҙонса туника - сигеү менән биҙәлгән, ҡатын-ҡыҙ күлдәктәре - мәрйен менән биҙәлгән, кейем аҫтына ҡатын-ҡыҙ мотлаҡ ыштан кейгән (слайд).

Ирҙәр кейеме – күлдәк йәки оҙон туника – тувыр тип атала, киндер ыштан, аяҡ кейеме - сабата йәки башҡа аяҡ кейеме булған (слайд).

Мари биҙәктәре биҙәүестәрҙән тыш, һаҡлағыс, кешенең билдәле бер социаль ҡатламға ҡараған символы ролен уйнаған геометрик орнаменттарҙан торған.

**Тәрбиәсе:** Балалар, урыҫ халҡының ниндәй милли ризығын әйтә алаһығыҙ?(яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Афарин, балалар. Хәҙер мари халҡының милли ризығы тураһында һөйләйем.

Милли ризыҡтары: байрам-йола аш-һыуы - ҡоймаҡ (мелнä) йәки оладьи (изи мелнä)), ҡуйы ярманан бутҡа (пучымыш), шыйыҡ бутҡа (немыр). Сөсө ҡамырҙан аш (шере лашка) һәм әсе ҡамырҙан (шушо лашка).

Байрамдары: Уярня (Масленица) – (февраль аҙағы март башы). Мари халҡы ҡыш аҙағында байрам үткәрә, унда ҡышты оҙаталар һәм яҙҙы уның йәшәү

көсө һәм ҡояш йылыһы менән ҡаршы алалар. Байрамда ҡышҡы һәм яҙғы йола элементтары берләшкән.

Ага – пайрем – һөрөнтө ерҙәр, һуҡалар байрамы. Был баҫыу эштәрен тамамлау байрамы.

Угинде – уңыш байрамы – 2 август. Угинде мариҙарҙың бөтә төркөмдәренең байрам календарына инә. Ул баҫыуҙа йыйыу эштәрен башлаған ваҡытта үткәрелә.

## Удмурт халҡы

**Тәрбиәсе:** Республикала йәшәүсе иң күп халыҡтар иҫәбенән удмурт халҡы тора.

Удмурттар – фин-уғыр халҡы.

Милли кейемдәре: төньяҡ – удмурт ҡатын-ҡыҙҙар кейемдәре туника – күлдәктән, сигелгән аллы түшелдеректән тора; Көньяҡ удмурт кейеме:күлдәктән, билдән тегелгән камзул һәм бейек түшле алъяпҡыстан тора.

Ирҙәр кейеме: бейек булмаған тәҙ,ҡыйыҡ яғалы күлдәк, күлдәкте үрелгән йәки күн билбау менән кейгәндәр, киң салбар.

Милли ризыҡтары: төрлө төҫтәге аштар (шыд): щи - кубистаен шыд, бәшмәкле аш - губиен шыд, әсе ҡамыр киҫәктәре менән аш - низилиен (нугылиен) шыд, туҡмас - тыкмачен шыд. Көлсә (табань), бәрәмәс (пепеч, пересьмон), билмән.

Байрамдары: Толсур (Рождество) - йыйылған уңыш, артабанғы именлек хаҡына беренсе ҡышҡы байрам.

Вой дыр (Масленица) - ҡышҡы миҙгелдә һуңғы байрам. Ул февраль аҙағында - март башында аҙна буйына бара. Йолаһы буйынса, Майлы аҙнаға ҡоймаҡ бешерәләр, туғандарын ҡунаҡҡа саҡыралар һәм үҙҙәре ҡунаҡҡа йөрөйҙәр.

**Тәрбиәсе:** Балалар, бына беҙ ҙә республикабыҙҙа йәшәгән халыҡтар тураһында белдек. Әйтегеҙ әле, ниндәй милләттәр йәшәй? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Бик яҡшы! Башҡортостан Республикаһы төрлө халыҡтар өсөн йорт булып тора, уларҙың һәр береһе мәҙәни мираҫының бай төрлөлөгөнә үҙ өлөшөн индерә.

(«Дуҫлыҡ иле» йырын тыңларға).

## Өфө тарихы

**Маҡсат:** тыуған ҡала тураһында белемде киңәйтеү.

**Йыһазландырыу:** фотоһүрәттәр, иллюстрациялар, слайд, Өфө тураһында йырҙар.

**Дәрес барышы:**

«Гүзәл Өфөм» йырын ебәрергә.

**Тәрбиәсе:** Балалар, был йырҙа ниндәй ҡала тураһында һүҙ бара? (яуаптар). Дөрөҫ, мин һеҙгә бөгөн баш ҡалабыҙ тураһында һөйләйем.

Беҙ һеҙҙең менән Өфө ҡалаһында йәшәйбеҙ. Өфө - Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы. Быйыл ҡалабыҙға 450 йыл тулды. Өфө барлыҡҡа килеү датаһы ҡала йылъяҙмаһында 1574 йыл тип билдәләнә. Өфө ҡалаһы Ағиҙел йылғаһының үҙәнендә Өфө һәм Дим йылғалары ҡойған ерҙә урынлашҡан. Фараздарҙың береһе буйынса, «Өфө» атамаһы боронғо төрки телендәге «уба» - «холм, таулы ер» һүҙенән килеп сыҡҡан.

Иван Нагойҙы Өфөнөң беренсе төҙөүсеһе тип иҫәпләйҙәр. 1574 йылда Ағиҙел буйында Туратау тауында («Гора-крепость») ағас ҡәлғә, Троицк сиркәүе, йорттар һәм хужалыҡ ҡаралтылары төҙөлә.

**Тәрбиәсе:** Кем әйтә, республикабыҙ символикаһын? (флаг, герб).

**Тәрбиәсе:** Афарин! Һәр илдең, төбәктең үҙ символикаһы, шулай уҡ ҡала-райондарҙың үҙ флагы һәм гербы бар. Мин һеҙгә Өфө символикаһы тураһында һөйләйем хәҙер.

Өфө гербында һыуһар төшөрөлгән. Яҫы кәүҙәле, матур бөгөлгән муйынлы һыуһар ышаныс һәм тыныслыҡты аңлата. Уның бөтә фигураһы ла байлыҡты, ғорурлыҡты һәм дәрәжәне кәүҙәләндерә. Герб майҙанының көмөш төҫө - ышаныс билдәһе. Саф күңеллелек һәм мәрхәмәтлелек. Герб осоноң йәшел төҫө муллыҡты, шатлыҡты, азатлыҡты, тыныслыҡты аңлата. Уның ҡала гербында урынлашыуы тәбиғи байлыҡты күрһәтә (слайд, фотоһүрәт).

Өфө флагы аҡ төҫтә һәм йәшел төҫтә горизонталь һыҙаттарҙан торған тура мөйөшлө туҡыма. Аҡ һыҙат уртаһында йүгереп барған һыуһар төшөрөлгән.

- аҡ төҫ - ышаныс, ихласлыҡ һәм изгелек билдәһе;

- йәшел төҫ – байлыҡ, шатлыҡ, азатлыҡ, тыныслыҡ билдәһе (слайд, фотоһүрәт).

**Тәрбиәсе:** Өфө ҡалаһы тураһында ҡыҫҡаса факттар.

- Өфө – халыҡ иҫәбе буйынса (1,14 миллион кеше) миллионлы ҡала. Рәсәйҙә 10-сы һәм Европала 31-се урында тора.

- Өфө – Рәсәйҙең миллион кеше йәшәгән ҡалалары араһында иң йәшел ҡала.

- Өфө һәм Ағиҙел йылғалары аға. Улар уны ике өлөшкә бүлә – үҙәк һәм сик яҡ.

- Өфөлә бик күп мәсеттәр, ғибәҙәтханалар (храмдар) һәм һәйкәлдәр бар.

Тәрбиәсе: Балалар, Өфөлә ниндәй һәйкәлдәр бар? (яуаптар).

Тәрбиәсе: Афарин! Өфө ҡалаһында күренекле урындар бик күп, һәм бына улар:

1. Салауат Юлаев һәйкәле - башҡорттарҙың милли геройы, бейеклеге 10 метрлыҡ һәйкәл. Башҡортостандың 7-се мөғжизәһе исемлегендә почетлы урынды биләй.

2. Дуҫлыҡ монументы – бейек стела, уның нигеҙендә ҡулдарына тыныслыҡты һәм сәскә атыуҙы символлаштырған лавр таждары тотҡан башҡорт һәм рус ҡатын-ҡыҙҙары ултыра.

3. Беренсе Өфө йәмиғ мәсете (соборная мечеть) – 1830 йылда асыла, 100 йылдан ашыу Рәсәйҙә төп мәсет булып тора.

4. «Ете ҡыҙ» фонтаны – Өфөнөң иң ҙур фонтаны. Сараны асыу тантанаһы 2015 йылдың 30 июнендә «Театр» скверында уҙҙы. Үҙенең исемен ул башҡорт эпосына һәм бейеүенә арналған милли кейемдәге ҡыҙҙар төркөмөнән торған скульптура композицияһынан алды.

(слайд, фотоһүрәттәр курһәтергә).

Өфөнөң һәм тотош Башҡортостандың күренекле урындары тураһында ҡыҫҡаса АЛМА интерактив панелендә тыңларға мөмкин.

## Башҡорттарҙың милли ризығы

**Маҡсат:** балаларҙы башҡорт халҡының милли ризыҡтары менән таныштырыу, телмәр үҫтереү, балаларҙы телмәргә яңы һүҙҙәр индереү: бишбармаҡ, эремсек, бал, ҡаҙы.

**Йыһазландырыу:** фотоһүрәттәр, иллюстрациялар.

**Тәрбиәсе:** Һаумыһығыҙ, балалар! Һеҙҙең яратҡан ризыҡтарығыҙ ниндәй? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Бик яҡшы. Һәр кемдең үҙенең яратҡан ризыҡтары бар, бөгөн мин һеҙҙе башҡорт милли ризыҡтары менән таныштырам. Борон заманда башҡорттар күсмә халыҡ булған, шуға күрә башлыса ит һәм һөт ризыҡтары менән туҡланғандар.

Ҡаҙы - ҡаҡланған тултырма, бишбармаҡ, ыумас ашы бешергәндәр.

**Тәрбиәсе:** Ә һыйыр һөтөнән нимә эшләп була, кем әйтә? (яуаптар).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ! Һөттән бик күп аҙыҡ-түлек эшләргә мөмкин. Башҡорттар һыйыр һөтөн дә, бейә һөтөн дә тотонғандар. Мәҫәлән, бейә һөтөнән ҡымыҙ эшләгәндәр. Ҡымыҙ бик файҙалы ла.

Эремсек, ҡорот, айран, ҡаймаҡ.

Бәлеш бешереү - бәлеш, ваҡ бәлеш, ҙур бәлеш. Яҙын ҡайын һутын эскәндәр, емештән ҡаҡ яһағандар. Үлән, мәтрүшкә, ҡарағат япраҡтарын сәй итеп эскәндәр.

**Тәрбиәсе:** Балалар, беҙгә бал ҡорто нимә бирә? (яуаптар, бал)

**Тәрбиәсе:** Афарин, дөрөҫ. Эйе, беҙҙең башҡорт балы бөтә донъяға данлы, ул Башҡортостандың бай һәм үҙенсәлекле үҫемлектәренән йыйыла.

## Башҡорттарҙың музыка ҡоралдары.

Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралдары - мәҙәниәтенең һәм тарихының бер өлөшө. Боронғо инструменттар кеүек үк, улар башҡорттарҙың үҙенсәлектәрен, темпераментын һәм менталитетын, уларҙың этнос булараҡ формалашыу шарттарын сағылдыра. Балаларҙы башҡорт музыка ҡоралдары менән таныштырыу.

**Маҡсат:** балаларҙа башҡорт милли музыка ҡоралдарына ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу.

**Йыһазландырыу:** фотоһүрәттәр, иллюстрациялар, музыка ҡоралдары, аудио, макет.

**Дәрес барышы:**

**Тәрбиәсе:** Балалар, беҙ йәшәгән республика нисек атала? (балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, ә һеҙ ниндәй музыка ҡоралдарын беләһегеҙ? (Балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Бик яҡшы! Бөгөн мин һеҙгә башҡорт халҡының милли музыка ҡоралдары тураһында һөйләйем. Бәлки һеҙ берәй башҡорт музыка ҡоралдарын беләһегеҙҙер? (балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, башҡорт халҡының музыка ҡоралдары бик күп, һәм шулай итеп, музыка ҡоралы - ҡурай.

Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы - ҡурай. Уны ҡурай үләненән эшләйҙәр. Тауҙар араһында, баҫыуҙарҙа ҡурай үҫә. Беҙҙең дә ҡурай Ирәндек итәгендә бик күп үҫә. (Фото) Үҫемлек сатырға оҡшаған, йәйен сәскә ата, көҙөн тамыры аҫтына киҫеп алалар, һабаҡтарын таҙарталар, киптерәләр, һуңынан бер яғынан - 4 уйым һәм икенсе яғынан 5 уйым киҫәләр (ҡурай фотоһы).

Балаларға ҡурай моңон ҡуйырға.

**Тәрбиәсе:** Балалар, һеҙгә ҡурай моңо оҡшанымы? (балаларҙың яуаптары). Киләһе музыка ҡоралы - дөнгөр. Бәлки, кем ишеткәндер был музыка ҡоралы тураһында? (балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Әйҙәгеҙ, мин һеҙгә дөңгөр тураһында һөйләйем.

Дөңгөр – бубнға оҡшаған һуҡма инструмент.

Ағастан яһалған түңәрәк (овал) ҡулса, ике яғы ла күн мембрана менән уратып алынған. Корпус тирәләй ике ҡат көмөш тәңкәләр урынлаштырылған. Уйын ваҡытында бармаҡ һәм ус менән һуғалар (фотоһүрәт, слайд).

(Көй ебәрергә).

**Тәрбиәсе:** Балалар, һеҙгә дөнгөрҙә уйнаған көй нисек, оҡшанымы? (балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Тағы бер музыка ҡоралы ҡумыҙ.Шуға күрә ул элек башҡорт ҡатын-ҡыҙының уйын ҡоралы булды. Ҡумыҙ моңо тыныс һәм яғымлы, уның тауышына тыныс йырларға һәм бейергә мөмкин (фотоһүрәт, слайд).

(Көй ебәрергә).

**Тәрбиәсе:** Икенсе музыка ҡоралы думбыра - сиртеп уйнай торған ҡыллы музыка ҡоралы, башҡорт сәсәндәренең традицион музыка ҡоралы. Уның башҡарыуында эпик хикәйәттәр һәм ҡобайырҙар, шулай уҡ йырҙар яңғырай.

(Көй ебәрергә).

## Башҡортостан Республикаһының күренекле шәхестәре

**Маҡсат:** балаларҙы Башҡортостан Республикаһының күренекле кешеләре, уларҙың ҡаҙаныштары һәм уңыштар тарихы менән таныштырыу.

**Йыһазландырыу:** Фотоһүрәттәр, иллюстрациялар, макеттар, китаптар.

**Дәрес барышы:**

### Салауат Юлаев

«Уралым» башҡорт халыҡ йырын ебәрергә.

**Тәрбиәсе:** Балалар, беҙ республикабыҙҙың исемен беләбеҙ, нисек атала? (балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, беҙ һеҙҙең менән Башҡортостан Республикаһында йәшәйбеҙ. Республикабыҙ матур тәбиғәте менән дан тота, шулай уҡ республикала ла күренекле шәхестәр күп. Бөгөн һеҙгә Салауат Юлаев тураһында һөйләргә теләйем. Кем әйтә, Салауат Юлаев кем ул? (балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ! Салауат Юлаев 1752 йылдың июнендә Өфө провинцияһы Шайтан-Көҙәй улусының Тәкәй ауылында (хәҙерге Салауат районы) башҡорт старшинаһы Юлай Аҙналиндың ғаиләһендә тыуған. Салауат физик яҡтан ныҡ булып үҫкән, музыка һәм тәбиғәтте яратҡан. (слайд, фотоһүрәттәр).

Ата-әсәһе Салауатта Ватанға ҡарата һөйөү һәм үҙ халҡына тоғролоҡ тойғоһон тәрбиәләп үҫтергәндәр. Шул уҡ ваҡытта ул рус телен яҡшы белгән. Шиғриәт тә уның өсөн ят булмаған. Шиғырҙарының күбеһе тыуған яҡҡа, халыҡҡа, ата-бабаларҙың ғөрөф-ғәҙәттәренә һәм иманына арналған. Салауат Юлаев шиғырҙарын башҡорт телендә яҙған, шуға күрә уның текстары лингвистик ҡомартҡы булараҡ та ҡиммәтле. Уның бер нисә халыҡ йырын теркәйҙәр. Өфө ҡалаһының иң бейек нөктәһендә, Ағиҙел йылғаһы өҫтөндә, Салауат Юлаев һәйкәле тора. Был һәйкәл Башҡортостан Республикаһының ете мөғжизәһенең

береһенә инә һәм уның һәйкәленең һүрәте символдарҙың береһе – гербты биҙәй (слайд, фотоһүрәттәр).

**Тәрбиәсе:** Әйтеүемсә, Салауат Юлаев шиғырҙар яҙған. Уның шиғырҙарының береһен уҡып ишеттерәм һеҙгә (тәрбиәсе шиғыр уҡый).

## Мифтахетдин Аҡмулла

**Тәрбиәсе:** Балалар, мин һеҙгә республикабыҙҙың тағы ла бер билдәле шәхесе тураһында һөйләйем.

Мифтахетдин Камалетдин улы Аҡмулла 1831 йылдың 14 декабрендә (яңы стиль буйынса – 26) Ырымбур губернаһының Бәләбәй өйәҙе 12-се Башҡорт кантоны Күл-Мең улусының Туҡһанбай ауылында (хәҙерге Башҡортостан Республикаһының Миәкә районы) тыуған (слайд, фотоһүрәттәр).

Мифтахетдин Аҡмулла – шағир, мәғрифәтсе, философ. Ул ҡыҙыҡһыныусан һәм уҡымышлы малай булып үҫә. Аҡмулла, үҫеп еткәс, сәйәхәткә юллана. Көньяҡ Башҡортостандан башлап, артабан Урал аръяғы буйлап, Көнсығыш Себерҙең көнбайыш территорияһына тиклем барып етә. Шағир-импровизатор булараҡ сығыш яһап, Ҡаҙахстан ауылдарында үҙенең эҙен ҡалдыра. Аҡмулла мәғрифәтселек идеяларын тарата, халыҡ менән туранан-тура аралаша. Ябай халыҡтың тормошон еңеләйтеүҙең төп ысулын ул белем биреүҙә, белем алыуҙа, наҙанлыҡты бөтөрөүҙә күрә.

Мифтахетдин Аҡмулла әҫәрҙәре: Нәсихәттәр, Атайыма хат, Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!

Әлмәт ҡалаһындағы урам, Башҡорт педагогия университеты күренекле башҡорт шағирының исемен йөрөтә. Шулай уҡ Аҡмулла исемен ошо уҡ исемдәге әҙәби премия йөрөтә. 2008 йылдың 8 мартында Өфө ҡалаһында Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге сквер эргәһендә һәйкәл ҡуйылған.

**Тәрбиәсе:** Балалар, хәҙер мин һеҙгә Мифтахетдин Аҡмулланың «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» шиғырын уҡып ишеттерәм (тәрбиәсе шиғыр уҡый).

## Миңлеғәле Шайморатов

**Тәрбиәсе:** Хәтерегеҙгә төшөрәйек, башҡорт халҡының милли батыры кем? (С.Юлаев).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ! Башҡорт халҡы һәр саҡ үҙенең батырлығы менән дан тота, бөгөн мин һеҙгә генерал Миңлеғәле Шайморатов тураһында һөйләйем (слайд, фотоһүрәттәр).

Миңлеғәле Минһаж улы Шайморатов 1899 йылдың 15 авгусында Башҡортостандың Ҡырмыҫҡалы районы Биштәк ауылында тыуған. Миңлеғәле Шайморатов физик яҡтан ныҡ һәм көслө булып үҫә, бала саҡтан аттар ярата.

Өфөнө колчактарҙан азат иткәндән һуң, 1919 йылдың 18 июнендә Миңлеғәле Шайморатов үҙ ирке менән Хәрби Армияға бара. Уны 270-се Белорет уҡсылар полкына рядовой ҡыҙылармеец итеп ҡабул итәләр.

1941 йылдың 25 декабрендә Өфөгә килә һәм 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры вазифаһын башҡара башлай.

**Тәрбиәсе:** Балалар, 9 майҙа, кем әйтер, ниндәй байрам? (балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ, Еңеү байрамы. Бөйөк Ватан һуғышы 1941 йылда башлана. Миңлеғәле Шайморатов Башҡорт кавалерия дивизияһында 1942 йылдың 2 июленә тиклем һуғышта ҡатнаша.

1942 йылдың 10 ноябрендә Шайморатов генерал-майор исемен ала.

Миңлеғәле Шайморатов – генерал, хәрби начальник, хәрби разведчик, башҡорт халҡының геройы.

Генерал Шайморатов хөрмәтенә ҡала-ауылдарҙа урамдарға исеме бирелгән, фильмдар төшөрөлгән, бик күп китаптар яҙылған. Өфө ҡалаһында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының хәрби дан музейы асылған. 2020 йылдың 30 октябрендә М.Шайморатовҡа Рәсәй Федерацияһы Геройы исеме бирелде. 2022 йылдың 11 октябрендә Өфө ҡалаһының Совет майҙанында генерал-майор М.Шайморатовҡа һәйкәл асылды.

**Тәрбиәсе:** М.Шайморатов ниндәй булған? (көслө, ныҡлы). Уға ниндәй исем бирелгән? (балаларҙың яуаптары).

«Шайморатов генерал» йырын ҡуйырға (Музыка: З.Исмәғилева, Д.Кадир һүҙҙәре).

## Шәйехзада Бабич

**Тәрбиәсе:** Балалар! Кем башҡорт шағиры, мәғрифәтсе булған? «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» шиғыры авторы?(балаларҙың яуаптары).

**Тәрбиәсе:** Дөрөҫ! Мифтахетдин Аҡмулла. Башҡортостандың тағын бер шағиры тураһында һеҙгә һөйләйем, ул Шәйехзада Бабич (слайд, фотоһүрәттәр).

Шәйехзада Бабич 1895 йылдың 2 ғинуарында Өфө губернаһының Бөрө өйәҙендә, ҙур булмаған Әсән ауылында тыуған. Әлеге ваҡытта был Башҡортостандың Дүртөйлө районы. Ш.Бабичтең атаһы Мөхәмәтзакир Бабичев була, ул Әсән ауылында мулла булып хеҙмәт итә.

1911 йылда Бабич Өфөләге, «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Был уҡыу йортонда ул 1916 йылға тиклем белем алға. Уҡыған ваҡытта уны әҙәбиәт

ҡыҙыҡһындыра, ул әҙәби һәм музыкаль түңәрәктәргә йөрөй, уның тәүге әҫәрҙәре ошо уҡ мәҙрәсәлә сыға, «Парлак» журналы биттәрендә донъя күрә.

Әҫәрҙәре: «Ҡурай», «Яҙғы йыр», «Минең фәрештәм», «Һылыуҡайҙар», «Исем гөлләмәһе».

2019 йылдың 28 июнендә Өфө ҡалаһында шағир һәм күренекле йәмәғәт эшмәкәре Шәйехзада Бабичҡа һәйкәл асылды.

**Тәрбиәсе:** Йомғаҡ яһап, һеҙгә Ш.Бабичтың шиғырын уҡыйым (тәрбиәсе шиғыр уҡый).

## Мостай Кәрим

**Тәрбиәсе:** Һеҙгә тағы ла бер билдәле шәхес, шағир, яҙыусы, драматург хаҡында һөйләйем. Башҡортостан Республикаһының халыҡ шағиры Мостай Кәрим (Мостай Сафа улы Кәримовтың ысын исеме) (слайд, фотоһүрәттәр).

1919 йылдың 20 октябрендә Шишмә районының Кләш ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 1941 йылда Башҡорт дәүләт педагогия институтын, тел һәм әҙәбиәт факультетын тамамлай. "Пионер" журналында эшләй.

Мостай Кәримдең әсәһе Вәзифә музыка һәм бейеү яратҡан. Ул өй эштәрен тамамлағас, балаларына концерттар һәм спектаклдәр күрһәткән булған. Миңлеямал, Оло әсәһе, бик күп халыҡ әкиәттәрен белгән булған һәм уларҙы йә төндә усаҡ янында, йә урманға, тауға барғанда балаларына һөйләр булған.

М.Кәримдең әҫәрҙәре – «Беҙҙең өйҙөң йәме», Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Йәмил исемле бәләкәй малай һәм Оксана исемле ҡыҙ тураһында яҙылған. «Айгөл иле», «Ай тотолған төндә» һ.б (слайд, фотоһүрәттәр).

Мостай Кәрим тураһында иҫтәлек: ҡалаларҙағы урамдарға, шулай уҡ Мәскәү урамдарының береһенә күренекле башҡорт яҙыусыһы, шағирҙың исеме бирелгән. Шулай уҡ уның исемен Өфө Милли йәштәр театры һәм 158-се башҡорт гимназияһы йөрөтә. Өфөлә М.Кәрим һәйкәле ҡуйылды (слайд, фотоһүрәттәр).

**Тәрбиәсе:** Йомғаҡ яһап, һеҙгә М. Кәримдең шиғырын уҡып ишеттерәм (тәрбиәсе шиғыр уҡый).

**«Атайсал» модуленә йомғаҡ яһап инетрактив панельдә (төбәк компоненты) балаларға викторина үткәрергә.**

# СОДЕРЖАНИЕ


Инеш һүҙ............................................................................................. 3

1. «Ғаиләм» модуле........................................................................... 5

2. «Уйнайыҡ» модуле........................................................................ 9

3. «Аралаш» модуле.......................................................................... 16

4. «100 һүҙ» модуле........................................................................... 19

5. «Бейейек» модуле.......................................................................... 23

6. «Полиглот» модуле........................................................................ 26

7. «Атайсал» модуле.......................................................................... 34